ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

7-13 ноябрь (ҡырпағай) 2015

№45 (671)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йөкмәткеле һүҙ мөһимерәк** 5



**Балаңа серҙәш бул!** 6



**Бер фекергә килеү өсөн...**



ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшеү кәрәк 8-9

**Беҙҙең ижади ғаиләбеҙ...**



рухиәт һағында 10-11

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2016 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу бара. Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Хаҡтар шулай: "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһы - 545 һум 76 тин.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөн тормош сифатыбыҙ хаҡында ниндәй кимәлдә һүҙ йөрөтөргә була?

***Илдар ҒӘБИТОВ, иҡтисад фәндәре кандидаты:*** Тормош сифаты хаҡында һүҙ тигәс, бер ауылдаштың әйткәне иҫкә килеп төштө. "Бөгөн, шөкөр, етеш йәшәйбеҙ, тик бәхет кенә юҡ", тигәйне ул осрашып һөйләшкән саҡта. Ысынлап та, элгәреге совет осоро менән сағыштырғанда тормошобоҙ етеш, ул ризыҡ тиһеңме, ҡулланыу тауарҙары, көнкүреш техникаһы булһынмы... Күптәр хыялында ғына йөрөткән моратына ла ирешеп, машиналы ла булып бөттө. Тик, баяғыса, кеше хәҙер әйбер, аҡса ҡолона әйләнеп, бер-береһенә мөнәсәбәт йылылығын, кешелек сифатын юғалта бара, минеңсә. Аралар һыуынды, хатта бер туғандар сит кешеләргә әйләнеп, дошманлашып бөттө. Әле бына эштә лә шул турала һөйләшеп алдыҡ. Элек Октябрь байрамы көндәрендә, мәҫәлән, һәр ерҙә байрамға әҙерлек саралары, кәйеф күтәренкелеге һиҙелә ине. Берғәләшеп демонстрацияға сығыу - дуҫ-иш, туғандар менән аралашыу, күрешеү сараһы ла булды. Хәҙер, әйткәнемсә, тормош фәҡәт аҡсаға ҡоролдо. Матди байлыҡ бәхет килтерә, тип уйлап, шул арҡала хата юлдан киткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Матди байлыҡ тигәндән, уның да сифаты бөттө түгелме бөгөн? Сифатлы ҡулланыу тауарҙары етештереү бөгөн бизнесҡа ҡулай түгел. Хәҙер бит әйберҙе элекке һымаҡ мәңгелек итеп түгел, ә "бер көнлөк" итеп сығаралар, сөнки тиҙ генә эштән сығып, ресурсы бөткән тауар урынына ҡулланыусы яңыһын һатып алырға мәжбүр була. Мәҫәлән, срогы сикләнгән (100 сәғәтлек) лампочкаларҙы ғына алып ҡарағыҙ. Йә булмаһа, бер сезонға ғына етерлек аяҡ кейемдәре лә шул турала һөйләй бит инде. Сифатһыҙ тауар шулай итеп намыҫһыҙ бизнесҡа юл аса.

Кешенең тормош сифаты яҡшыра төштө, тигәйнем башта, уның ҡарауы, беҙҙе бит хәҙер фәҡәт ҡулланыусыға, пассив обывателгә әйләндерҙеләр. Кеҫәлә - "крутой" телефон, иномаркала ғына елдерәбеҙ, тик бына кешелек сифаттарын юғалта барабыҙ түгелме, йәмәғәт?

***Фәриҙә НУРЛЫҒАЯНОВА, хеҙмәт ветераны:*** Тормош сифаты - ул беҙҙең уйҙарыбыҙ сифаты, тигән, имеш, Эйнштейн. Был фекерҙе ул ниндәй контекста әйткәндер, уныһын белмәйем, ләкин уны бөгөнгө хәлебеҙ һәм дә көнитмешебеҙгә ҡарата ҡулланыуҙан тыйылыр инем. Бөйөк ғалим менән һүҙ көрәштерергә йыйынмайым, әлбиттә. Ул кешелектең иң аҡыллы, белемле вәкиле булараҡ, планетабыҙ һәм цивилизация кимәленән сығып, глобаль фекер йөрөткәндер, ер йөҙөндә тыныслыҡ, берҙәмлек көҫәүенә лә ишара бар һымаҡ. Ә беҙ, ябай халыҡ тоҡомо, сифат төшөнсәһен иң тәүҙә һулаған һауабыҙ, эскән һыуыбыҙ, ашаған ризығыбыҙҙа күреп өйрәнгәнбеҙ. Шунан арыны күрә белмәгәндән дә түгел, тыныслыҡ, ғәҙеллек, тигеҙлек бөтәбеҙгә лә кәрәк, ләкин уйың таҙа, сифатлы булһын өсөн әлеге эскән һыуыңдың таҙа булыуы тәүшарт түгелме ни? Материя - беренсел, аң - икенсел, тип тә өйрәткәйнеләр бит әле беҙҙе. Етеш донъяла йәшәһәң генә тормош сифаты хаҡында гәп һатырға мөмкиндер ул, тип уйлайым мин. Ә инде ейгән тәғәмең химия ҡатыш яһалма аҙыҡтан ғибәрәт, ә эсәр һыуың - ағыу икән, ниндәй сифатлы уй тыуыуы мөмкин күңелдә? Бына ниндәй хәлдәбеҙ бөгөн. Кешелек донъяһында агрессия көсәйә, һуғыштар бара, кешеләр араһында әҙәп тигән нәмә бөттө - әлеге ағыулы, радиациялы, ГМО-лы һ.б. шундай ризыҡ касафаты түгелме икән был, тигән уй борсолай мейене...

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# БЕР НӘМӘ ЛӘ ҮҘГӘРМӘЙӘСӘК, ТИП...

## ҡул һелтәп ҡуймайыҡ

**IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайынан тәү сиратта башҡорт халҡына ҡағылышлы актуаль мәсьәләләрҙең ентекле тикшерелеүен көтәм. Унан һуң, ҡабул ителгән ҡарарҙар буйынса эш артабан да дауам итер, резолюцияларҙа күрһәтелгән талаптарҙы ғәмәлгә ашырыу барышы контролгә алыныр һәм һәр ваҡыт Ҡоролтай ағзаларының күҙ уңында булыр, тип ышанам.**

**(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).**




12+

**✓ Шундай ҡатмарлы шарттарҙа иң мөһиме - үҙебеҙҙең туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу зарурлығы. Был йәһәттән Ҡоролтай иңенә ҙур яуаплылыҡ һалынған. Милли мәғариф, мәҙәниәт өлкәләрендә хәл ителәһе етди мәсьәләләр күп.**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЭШТЕ БАШЛАУЫ ҒЫНА ҠЫЙЫН...

**Рәүеф БИКТАШЕВ, хаҡлы ялдағы уҡытыусы, Сибай ҡалаһы:** Ауыр заманда йәшәйбеҙ, тиһәләр ҙә, тормоштоң ауырлығын артыҡ тоймайым. Тырыш, йүнсел кеше яҡшы йәшәй, әмәлен табып, аҡсаһын да эшләй, ауыл ерендә лә бына тигән итеп донъя көтә. Үҙебеҙҙең Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылы халҡын алып әйткәндә лә, күпләп эре мал көтөп, йүнен йүнләргә тырышалар. Пилорама тотҡан кешеләр бар. Улар ауылдаштарына эш урындары аса, эш хаҡынан тыш, утын, бесән әҙерләшергә лә әмәлен таба. Был уҙамандар халыҡ мәнфәғәтен дә күҙ уңында тота, мохтажлыҡ тыуғанда төрлөсә ярҙам итергә әҙерҙәр. Мәҫәлән, төпкөл генә Тәкәһуҡҡан ауылынан бер кеше Себерҙән аҡса эшләп ҡайтып, ата-бабалар нигеҙен ташлап, ситкә таралышып бөткән ауылдаштарын киренән тыуған ерҙәренә ҡайтарыр өсөн эш урындары булдырҙы.

Эште башлап ебәреп, яйға һалып алғансы ғына ауыр. Ауыл хужалығына хөкүмәт тарафынан ҙур иғтибар бүленмәһә лә, район хакимиәте ҡулынан килгәнсе эшҡыуарҙарға, ауылда кәсеп асҡан кешеләргә ярҙам итеп тора. Элек малды күп үрсетергә лә, техника тоторға ла рөхсәт ителмәне. Хәҙер ялҡауың ғына килмәһен, сикләүҙәр юҡ. Ҡайһы бер егәрлеләрҙең ниндәй генә төр техникаһы юҡ: еңел машинаһы, тракторы, йөк машинаһы, бесән сапҡысы, йыйғысы. Халыҡ совет заманындағы 70 йыл буйы мейегә һеңдерелгән эш тәртибенә күнеккән, тиһәк тә, яңыса йәшәй башлауыбыҙға егерме биш йыл булды бит. Тимәк, күптән үҙгәрергә ваҡыт.

Был бер мәсьәлә булһа, шундай уҡ мөһим һәм иғтибар талап иткән икенсе мәсьәлә рухи тәрбиәгә ҡайтып ҡала. Капиталистик илдәрҙең үҫеш юлын анализлап ҡараһаҡ, уларҙың һәр береһендә милли мәсьәлә артҡы планға күсеүе күренә. Беҙҙең илдә төрлө милләттәрҙең мәнфәғәте хәстәрләнгән кеүек булһа ла, халыҡ үҙ хоҡуғын үҙе ҡайғыртырға тейеш. Һәр кемдең яҙмышы үҙенең ҡулында булған кеүек, милләттең дә киләсәге һәр башҡорттоң үҙенән тора. Сибай ҡалаһы урамында өс башҡорт үҙ-ара русса һөйләшеп тора, йә берәүһе телен вата-емерә балаһы менән русса әңгәмәләшә икән, тимәк, ул кешеләр үҙ милләтен хөрмәт итмәй. Был иһә, улар үҙҙәрен дә хөрмәт итмәй, тигәнде аңлата. Сибай ҡалаһының ун меңдән ашыу кеше йәшәгән "Арҡайым" микрорайонында яңы мәктәп асылды, әммә унда башҡорт класы юҡ. Ата-әсәләр балаларын башҡорт класына уҡырға бирергә теләмәй. Бына ҡайҙа ул милләте алдында яуаплылыҡ тоймаған, үҙен хөрмәт итмәгән кешеләр. Нишләп балаларыбыҙ рухһыҙ, тамырҙарын үҙһенмәй, ситкә эшкә китә, сит милләт кешеләре менән ғаилә ҡора, тип аптырарға ла түгел - үҙебеҙ уларҙы шулай тәрбиәләйбеҙ...

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Бөгөн тормош сифатыбыҙ хаҡында ниндәй кимәлдә һүҙ йөрөтөргә була?*

**(Башы 1-се биттә).**



***Динә АРЫҪЛАНОВА, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Дөрөҫөн әйткәндә, сифат төшөнсәһе бик глобаль мәсьәлә булғанлыҡтан, был хаҡта бер-ике һүҙ менән генә яуап биреүе лә ҡыйын. Әгәр ҙә инде тормош сифаты хаҡында һүҙ йөрөтәбеҙ икән, был мәсьәләгә социаль юҫыҡтан ҡарау талап ителә. Йәшәү кимәле юғары булған кешеләр бар һәм улар байтаҡ хәҙер. Ләкин рәсми мәғлүмәттәргә күҙ һалһаң, халыҡтың күпселеге үҙенең тормош кимәленән ҡәнәғәт түгел, тип әйтер инем. Мәҫәлән, һаулыҡ һаҡлау өлкәһен генә алып ҡарайыҡ. Миңә эшем буйынса РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаеваның районлар буйлап халыҡ менән осрашыуҙарында булырға тура килә. Һәм ни күренә күҙгә? Урындарҙа халыҡ чиновниктар битарафлығынан, ауыр, етешһеҙ тормоштан йонсоған, бер ниндәй яҡлауһыҙ тороп ҡалған. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: Дума депутатына дауаханаға ятыу өсөн ярҙам һорап киләләр. Ошо хәлгә ниндәй аңлатма һәм баһа бирергә була шунан? Мөрәжәғәт итеүселәр ярҙамһыҙ тороп ҡалмай, әлбиттә. Ләкин урынлы һорау тыуа: ниңә депутат район дауаханаһының баш табибы, кеше сәләмәтлеге һағында тороусы, шуның өсөн эш хаҡы алыусы башҡа табиптар бурысын да үҙ иңенә йөкмәргә тейеш һуң әле? Депутаттың дәүләт әһәмиәтендәге туранан-тура үҙ компетенцияһына ингән бурыстары аҙмы ни, юғиһә? Уйлап ҡараһаң, эште йүнле, сифатлы итеп ойоштороу өсөн нимә етмәй һуң? Алдынғы технологиялар, тейешле медицина ҡорамалдары менән тәьмин ителгән районлар. Эште ойоштороу кимәле түбән, лидерҙар юҡ - бына ниҙә эш. Ғөмүмән, тормошобоҙҙоң ҡайһы өлкәһен генә алһаң да, сифат мәсьәләһе хаҡында ҡәнәғәтләнерлек берәй һүҙ әйтеүе ауыр, минеңсә. Экология торошо үҙегеҙгә яҡшы мәғлүм. Был иһә тағы ла беҙҙең тормош сифатына туранан-тура ҡағыла. Дөрөҫөн әйткәндә, химия һулайбыҙ, химия менән туҡланабыҙ. Айырыуса йәш быуындың сәләмәтлеге хәүеф аҫтында. Студенттар фәҡәт фастфуд менән туҡланыуға күсте бөгөн. Ә бит шул уҡ ваҡытта республикабыҙҙа етештерелгән аҙыҡ-түлек һәм ҡулланыу тауарҙары ситтән килтерелгәндәренә ҡарағанда күпкә сифатлыраҡ. Үҙебеҙҙекен ҡулланайыҡ!

Тормошобоҙ сифатына ҡағылышлы тағы бер мөһим өлкә: эш хаҡы һәм пенсиялар кимәленең бик түбән булыуы. Был йәһәттән тормош сифаты тураһында һүҙҙе башлап тороу ҙа урынһыҙ, сөнки пенсияның ҡап яртыһы коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә китеп тора. Һөҙөмтәлә ҡалған ни бары 6-7 мең һумды пенсионер ай буйына еткерергә тейеш. Бында ниндәй тормош сифаты тураһында һүҙ алып барырға мөмкин?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# БЕР НӘМӘ ЛӘ ҮҘГӘРМӘЙӘСӘК, ТИП...

## ҡул һелтәп ҡуймайыҡ

**(Башы 1-се биттә).**

Хәҙерге көндә бер башҡорт халҡы ғына түгел, бөтә халыҡтар ҙа ауыр көрсөк кисерә. Шундай ҡатмарлы шарттарҙа иң мөһиме - үҙебеҙҙең туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу зарурлығы. Был йәһәттән Ҡоролтай иңенә ҙур яуаплылыҡ һалынған. Милли мәғариф, мәҙәниәт өлкәләрендә хәл ителәһе етди мәсьәләләр күп, шулар буйынса ла бик төплө, эшлекле һөйләшеүҙәр һәм ҡарарҙар булыр, моғайын.

Сәйәси яҡтан сығып һүҙ йөрөткәндә, 25 йыл элек тырышып яулап алған суверенитетыбыҙҙы юғалтмаҫ өсөн шул осорҙа ҡабул ителгән декларацияларҙан тайпылмай эшләүҙе күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының төп бурыстарының береһе - башҡорт халҡының хоҡуғын яҡлау, ә был эш тик шул үҙаллылығыбыҙҙы раҫлаған рәсми ҡағыҙҙар арҡылы ғына атҡарылырға мөмкин.

Минеңсә, IV Ҡоролтайҙа республиканың тәбиғи ҡомарҡыларын һаҡлау, экологик мәсьәләләр, ауыл хужалығы, милли мәғариф һәм һаулыҡ һаҡлау буйынса мәсьәләләрҙең барыһы ла ҡаралырға тейеш. Шулай ҙа, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге оптималләштереү сәбәпле, ауыл ерҙәрендә медпункттар ябылыуына ҙур иғтибар бүленһә ине. Милли матбуғат буйынса ла эшлекле генә тәҡдимдәр яңғырар, моғайын. Сөнки башҡорт телендә сығарылған гәзит-журналдар мотлаҡ дәүләт ҡарамағында булырға тейеш.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөнөң "ВДНХ-Экспо" комплексында Ҡытайҙың Цзянси провинцияһының Иҡтисад һәм мәҙәниәт көндәре асылды. "Волга - Янцзы" проекты сиктәрендә республика 35 килешеү төҙөнө, шуларҙың 20-һе - Цзянси менән, тип иҫкә төшөрҙө сәләмләү һүҙендә Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов. Ҡытай провинцияһы губернаторы Лу Синьше сауҙа-күргәҙмә үҙәген, баҡыр-руда етештереү ҡалдыҡтарын файҙаланыу комплексын төҙөү, авиация двигателдәрен эшләүҙә хеҙмәттәшлек, студенттар менән алмашыу республикала ғәмәлгә ашырылыусы өҫтөнлөклө проекттар тип иҫәпләй.

✓Башҡортостан Хөкүмәте менән Цзянси провинцияһы араһында хеҙмәттәшлекте киңәйтеү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Республиканың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты менән провинцияның Туристик үҫеш комиссияһы етәкселәре үҙ-ара эш итеү хаҡында меморандум төҙөнө.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Федераль суд приставтары хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы коллективын һөнәри байрамдары һәм Рәсәйҙә суд приставтары институты ойошторолоуҙың 150 йыллығы менән ҡотланы. Төбәк Башлығы бурыслы кешеләр, шулай уҡ хеҙмәт хаҡы буйынса бурыстары булған предприятиелар менән эштә суд приставтары институтының мөһим ролен билдәләне. Приставтарҙың һөҙөмтәле эшләүе арҡаһында быйыл бөтә кимәлдәге бюджеттарға - 2,3 миллиард һумдан ашыу, граждандар һәм ойошмалар файҙаһына иһә ике тапҡырға күберәк аҡса күсерелгән, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рөстәм Хәмитов.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктә хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү буйынса даими эш итеүсе координация кәңәшмәһе ултырышын үткәрҙе. Унда хеҙмәт хаҡы буйынса бурысты бөтөрөү саралары тураһында һүҙ барҙы. Билдәләнеүенсә, бөгөнгә Башҡортостанда эш хаҡы буйынса бурыс 150-нән 200 миллион һумғаса тәшкил итә. Иң ҙур бурыс - Өфө һәм Октябрьский ҡалаларында, шулай уҡ Туймазы районында.

✓Башҡортостанда 2016 йылда үтәсәк Дәүләт Думаһына депутаттар һайлау буйынса алты бер мандатлы һайлау округы раҫланды. Улар - Өфө, Благовещен, Белорет, Нефтекама, Салауат һәм Стәрлетамаҡ округтары. Был округтарға инә торған ҡалалар һәм муниципаль районлар ҙа билдәләнде.

✓ **Туҡталыш павильонының ҡаҡ маңлайына эре, сағыу хәрефтәр менән "Кафеһы "Отдых" тигән һүҙҙәр сәпәлгән. Бына шундай наҙанлыҡҡа ни әйтәһең инде. Белмәгәс - һора икән дә бит!**



КИЛЕШМӘЙЕМ!




**"Булмаҕас, булмай икән баҙарҙа сөсө икмәк", ти икән берәү бала саҡтан яратҡан танһыҡ икмәген эҙләп хәлдән тайғас. Шуның кеүек, беҙ, республиканың ваҡытлы матбуғат баҫмаһы журналистары ла, баш ҡалабыҙ буйлап башҡорт теле ынйыларын эҙләп хәлдән тайһаҡ та, бер үк нәмәне ҡабатлап яҙа-яҙа арыһаҡ та, туған телебеҙҙе тупаҫ боҙған хаталы юлдарҙы күреп йүнкеһәк тә, был мәсьәләгә ҡул һелтәп ҡуйырға йыйынмайбыҙ, сөнки әсә телебеҙ - беҙҙең милли булмышыбыҙ, рухи асылыбыҙ ул.**

# ҺҮҘ – КҮҢЕЛ ЫНЙЫҺЫ

Әбына Башҡортостаныбыҙ-ҙа йәшәп тә, ошо илдең аҫаба халҡының туған теленә ҡарата һаман булһа үҙҙәрендә толерантлыҡ тәрбиәләй алмаған тәрбиәһеҙҙәр байтаҡ әле йәнәшәбеҙҙә. Ундайҙарҙы мин халҡым теленә генә түгел, уның асылына, булмышына ҡул һелтәп, тәкәрәп ҡараусылар тип әйтер инем. Миҫал эҙләп, алыҫ йөрөргә лә түгел. Берәй автобусҡа ултырып, баш ҡалабыҙҙың төп урамы - Октябрь проспектынан үтеүгеҙ ҙә бик күп ғибрәтле миҫалдарға юлыҡтырып, гәжәпләндерер, унан бигерәк ғәрләндерер һеҙҙе.

Әмин ҡунаҡтар килеп-китеп йөрөгән, баш ҡалабыҙҙың визит карточкаһы булған Өфө - аэропорт юлында күреп ғәрләндем башҡорт телен тупаҫ боҙоп яҙылған ана шундай хаталарҙың береһен: туҡталыш павильонының ҡаҡ маңлайына эре, сағыу хәрефтәр менән "Кафеһы "Отдых" тигән һүҙҙәр сәпәлгән. Бына шундай наҙанлыҡҡа ни әйтәһең инде. Белмәгәс - һора икән дә бит! ШОС һәм БРИКС саммиттары көндәре оятына нисек сыҙап торғандыр был һүҙҙәр...

Артабан бер аҙ бара биргәс, "Өфө" ҡапҡаһына етерҙән алда эленеп торған баннерҙағы һүҙҙәр иғтибарҙы йәлеп итте: "Башҡортостан - Рәсәйҙең аҫыл ташы". Автор-фәләне юҡ, ошо бер генә һөйләмдән ғибәрәт ул. Хатаһы ла юҡ, әлбиттә, шулай ҙа ғүмер буйы һүҙ хазинаһы менән эш итеп, уның ынйыға хас бөртөктәрен, һәр төрлө варианттарын, синонимдарын күңеле түрендә уйнатып өйрәнгән талапсан юлаусы был һөйләмдән бер һүҙенә абынырға тейештер, тип уйланым. Ниндәй генә зиннәтле, ялтыр-йолтор аныҡлаусы һүҙҙе өҫтәмә, аҫыл, алтын, гәүһәр һ.б тип әйтмә, йәнһеҙ, һалҡын таш күҙ алдында һынлана. "Башҡортостан - Рәсәйҙең аҫыл ынйыһы" тип бик тә тәҙәткә килде юл буйындағы әлеге һөйләмде.

Хатаһыҙ яҙыу ғына етмәй шул әле, һүҙ менән бик уйлап, һаҡсыл эш итә белеү ҙә кәрәк. Һөйләмең күңелгә таш булып ятмаһын, ә уны ынйылай балҡытып ебәрһен!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

Бөгөн интернет заманында былай ҙа милли матбуғаттың хәле еңелдән түгел, яҙылыусылар һаны йылдан-йыл кәмей. Былдай шарттарҙа үҙебеҙҙең башҡорт гәзит-журналдарын дәүләт ҡарамағында ҡалдырыу кәрәк. Был һорауға асыҡлыҡ индереүгә Ҡоролтай ҙа битараф ҡалмаҫ, моғайын.

III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында яһаған сығышымда мин милли кадрҙар әҙерләү мәсьәләһен күтәреп сыҡҡайным. Ләкин был мәсьәләне хәл итеү буйынса ниндәйҙер эштәр башҡарылыуы артыҡ һиҙелмәй. Шулай ҙа беҙгә бөгөн Рәсәй кимәлендә законлар ҡабул итерлек сәйәсмәндәр, белгестәр кәрәк булыуын барыһы ла аңлай. Милли фирҡәләр булмаһа ла, үҙебеҙҙең халыҡ араһынан депутаттар һайлап, сәйәси хәрәкәттә әүҙемерәк ҡатнашыу мәсьәләһен, бәлки, IV Ҡоролтай ултырыштарында тикшерерҙәр. Бының мөһимлеген һәр кем аңлап тора, бөтә етәксе урындарҙа сит милләт вәкилдәре эшләй, ә башҡорт халҡының да мәнфәғәте ҡайғыртылһын өсөн үҙебеҙҙең кадрҙар кәрәк. Әйткәндәй, һуңғы ваҡытта ситкә китеп белем алыусы хуп күргән йәштәрҙе республикаға кире ҡайтара алмау ҙа бына шул кадрҙар мәсьәләһенә бәйле. Эш урындарына ҡытлыҡ, үҫеш мөмкинлеге сикләнеүе һәм башҡа факторҙар быға ҡамасау итә. IV Ҡоролтай делегаттарының күҙ уңынан был мәсьәлә лә ситтә ҡалмаһын ине.

Ғөмүмән алғанда, IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына, һәр ваҡыттағыса, ҙур өмөттәр бағлана. Халыҡ та үҙен борсоған проблемаларға бер аҙ булһа ла асыҡлыҡ индерелер, тип көтә. Әйтергә кәрәк, ойошма эшендә туранан-тура ҡатнашмаһам да, Ҡоролтай үҙ бурыстарын мөмкин тиклем үтәп, тормошҡа ашыра алғандай проекттарын атҡаралыр, тип уйлайым. Милләттәштәргә ошондай үҙгәрештәр заманында берҙәм булырға, бер-беребеҙгә таяныһ эшләргә, бөгөнлөккә төшмәскә һәм барыбер бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк, тип ҡул һелтәп ҡуймаҫҡа кәңәш итәм. Туған телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һәм илебеҙҙе һаҡлап ҡалырға теләһәк, бер төптән эш итергә тейешбеҙ.

**Айрат ЗАРИПОВ,**
**философия фәндәре докторы,**
**Өфө дәүләт авиация техник университеты профессоры.**

УҠЫП СЫҠТЫМ...

# ТЕЛ ҺАҒЫНА КЕМ БАҪА?



**"Киске Өфө" гәзитен ижад итеүселәргә оло, сикһеҙ рәхмәтемде белдерәм. Уларҙың күңелдәренең, зиһендәренең, ғилемдәренең, уй-фекерҙәренең тәрәнлеге, халҡыбыҙҙы һаҡлап ҡалыуҙың берҙән-бер сараһы булған туған телебеҙҙе һаҡлау йүнәлешендәге эшмәкәрлеге һоҡландыра.**

Баҫманың 41-се һанында РФ Дәүләт Думаһы депутаты Рөстәм Рифат улы Ишмөхәмәтов менән ойошторолған "Үҙәк менән килешеү төҙөп, вәкәләттәрҙе яңынан ҡарау үҙ сиратын көтә" тигән сығышты ла ҡат-ҡат уҡып сыҡтым. "Башҡортостан Рәсәй Федерацияһы составында субъект булараҡ йәшәй, беҙгә ҡабаттан үҙәк менән килешеү төҙөп, вәкәләттәрҙе яңынан ҡарау ҙа үҙ сиратын көтә. Бәлки, әле ваҡыты түгелдер, әммә тоторо̄ҡло мәлде табып, быны мотлаҡ тормошҡа ашырыу зарур. Субъекттар тиң хоҡуҡлы булырға тейеш. Шуға беҙгә, үҙебеҙҙе үҙебеҙ тәьмин иткән төбәк булараҡ, вәкәләттәр күберәк бирелеп, килем дә күберәк ҡалһа, гәҙел буласаҡ", - ти депутат. Был бик кәрәкле һәм мөһим әһәмиәтле эш сиратын көтөп кенә ҡалмаһын, ә ғәмәлгә ашһын ине.

Рөстәм Рифат улының: "Беҙҙең етди милли идея юғалтылғанмы, әллә бөтөнләй юҡмы - аңлашылмай. Кавказ халыҡтарын ҡараһаҡ, улар Ислам диненән ситләшмәгән, Ислам уларҙы көсәйтә, милләт һанын арттыра һәм балаларға күберәкте бирә. Чечен Республикаһы башлығы Рамзан Ҡадиров, мәҫәлән, мосолман кейемендә йөрөп, үҙе өлгө күрһәтә. Шулай уҡ уларҙың яҡташлыҡ тойғоһо ла үҫешкән, бер-береһенә ныҡ ярҙам итәләр. Беҙ шундай туғанлыҡ традицияларыбыҙҙы юғалтҡанбыҙ..." - тиеүе менән дә килешәм. Беҙ, ысынлап та, һаман да диңгә ылығып китә алмайбыҙ. Был тәңгәлдә лә битарафлыҡ, вайымһыҙлыҡ көслө. Иманға, диңгә ылыҡһаҡ, үҙебеҙҙең йолаларҙы, туғанлыҡ традицияларын да ҡайтара алыр инек. Бына, мәҫәлән, яҡуттарҙың йәш быуынды үҫтереү фонды бар икәнен күптән һөйләйҙәр, ә ниңә башҡорттоҡо юҡ? Уны кемдәр булдырырға тейеш һуң?

Рөстәм Рифат улының, милләт даны шәхестәрҙән тора, тигән фекерен дә хуплайым. Сөнки ауылдарыбыҙҙа ла, районыбыҙҙа ла янып, ихлас эшләп йөрөүсе шәхестәрҙе хәҙер иҫкә алыусы юҡ. Был иһә етәкселәребеҙҙең рухи донъяһының, йәшәү рәүешенең заман талаптарына, законыбыҙ, шәриғәт ҡанундары, йолаларыбыҙ ҡыҫаларына тап килмәүенән киләлер, тип уйлайым. Ауыл ерендә булһынмы, районда мы, ҡаламы, абруйлы эше, булмышы, ҡарашы, әхлағы, йәшәү рәүеше менән өлгө булырҙай танылыу алған шәхестәр менән мәктәптәрҙә лә, балалар йорттарында ла, китапханаларҙа ла, музейҙарҙа ла йәштәрҙе осраштырыу саралары әүҙемләштереү зарур. Ә әле быдай аралашыуҙар бөтөнләй юҡ дәрәжәһендә. Быдай осрашыуҙарҙы йәш быуынды тәрбиәләүҙә әүҙем ҡулланмайбыҙ. Мәктәп директорҙарының, бигерәк тә филологтарҙың, тарих уҡытыусыларының иң төп бурыстары тип иҫәпләйем мин быны. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары мәрхүм булып бөтөп бара, тыл ветерандары ла - беҙҙең быуын кешеләре - бик аҙ ҡалды. Беҙҙең район кимәлендә тыл ветерандарына бөтөнләй иғтибар юҡ, тип әйтерлек.

Рөстәм Рифат улы тел мөхите булдырыу хаҡында ла матур фекер белдерә. Башҡортостан суверенитетының 25 йыллығына арналған тантананы телевизор аша ҡарап ултырҙым һәм, исмаһам, бер чиновниктың йәки дәүләт етәкселегендә эшләгән берәй кешенең үҙ телебеҙҙә - башҡортса телмәр тотмауы миндә бик тә көмһенеү тойғоһо уятыуын яҙмай булдыра алмайым. Дәүләт теле статусы алған телебеҙҙең дәүләт аппаратында сикләнеүе үҙе үк телгә һөйөү тәрбиәләү мәсьәләһен юҡҡа сығара түгелме? Хәтта БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе урынбаҫары, шағирә Йомабикә Ильясова ла башҡортса һөйләмәне. Был нимә? Башҡорт гел көмһенеп йәшәү синдромынан арына алмаймы? Илебеҙ Президенты Владимир Путиндың ШОС, БРИКС дәүләттәре башлыҡтарының саммиты ваҡытында: "Рус телен һәм башҡорт телен өйрәнегеҙ!" - тигән һүҙҙәрен барыбыҙ ҙа оноттоҡмо ни? Уны лозунг итеп, һәр урынға реклама итеп ҡулланырға кәрәкле изге һүҙҙәр бит. Тел һағына ғилемле, вазифалы, арҙаҡлы зыялыларыбыҙ ныҡлап, ихлас баҫмаға, боронғо, бик боронғо, бик тә матур телебеҙҙе кем һаҡларға тейеш һуң, тигән һорау борсоуға һала.

**Ғиндулла ШӘЙӘХМӘТОВ,**
**Рәсәйҙең атҡаҙанған уҡытыусыһы.**
**Ғафури районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының "Кара йөҙҙәр" спектакле биш номинацияла Рәсәйҙең "Алтын битлек" милли театр премияһы номинанты булды. Мәжит Ғафуриҙың повесы буйынса спектаклде режиссер Айрат Абушахманов ҡуйған. Рәсәйҙең милли премияһын тапшырыу тантанаһы 2016 йылдың 16 апрелендә Мәскәүҙең Станиславский һәм Немирович-Данченко исемендәге музыкаль театрҙа уҙасаҡ.

✓Өфө ҡала округы Советы муниципаль балалар һауыҡтырыу лагерҙары хеҙмәткәрҙәренә ярҙам итеү буйынса бер нисә ҡарар ҡабул итте. 2016 йылда ошо учреждение медиктары өсөн хеҙмәт хаҡына өҫтәмә билдәләү күҙ уңында тотола. Мәҫәлән, табиптарға - 15 мең, шәфҡәт туташтарына 5600 һум күләмендә өҫтәмә ҡаралған. Өҫтәмәләр июндән авгусҡа тиклем йәйге һауыҡтырыу кампанияһы осоронда ғына ғәмәлдә буласаҡ, тип билдәләй депутаттар.

✓Өфө ҡала округы Советы мотоспортты үҫтереүгә алты миллион һум субсидия бүлде. Ҡала Советы ултырышында Ғабдрахман Ҡадиров исемендәге техник спорт төрҙәре үҙәгенең матди-техник базаһын ныҡытыу буйынса сығымдарҙың бер өлөшөн финанслау тураһында ҡарар ҡабул ителде. Депутаттар аңлатыуынса, был аҡсалар мототехника һатып алыуға йүнәлтелә. Ыбынан тыш, аҡсалар юниорҙар командаһының республика һәм Бөтә Рәсәй ярыштарында ҡатнашыуына бәйле сараларға китәсәк.

✓Рәсәй Хөкүмәте бойороғо менән киләһе йылға халыҡтың коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү индексы раҫланды. 2016 йылдың икенсе ярты йыллығында Башҡортостанда коммуналь хеҙмәттәргә тарифтар 5,8 процентҡа артасаҡ. Дөйөм ҡағиҙә буйынса тарифтарҙы индексациялау икенсе ярты йыллыҡта үткәрелә, шуға күрә 2016 йылдың 1 июленә тиклем торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн хаҡтар артмаясаҡ. Билдәләнгән ваҡыттан һуң төбәктәр коммуналь түләүҙәр күләмен күтәрә ала.

✓Өфөлә "Рәсәй халыҡтары телдәре диалектологияһының көнүҙәк мәсьәләләре" XV Бөтә Рәсәй ғилми конференцияһы уҙғарыла. Форумды IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы сиктәрендә Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойошторa. Сара 20 ноябргә тәғәйенләнгән.

**"Башинформ"дан.**

## ЕТЕ РАЙОН

**Киров районы.** Райондың 303-сө балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Әлмира Усманова "Яратҡан уҡытыусым" төбәк конкурсында икенсе урын алды. Бәйгелә Әлмира Зөлфир ҡыҙы менән бергә Валерия Луговых ҡатнашты. Ул тәрбиәсеһе тураһында һөйләне, уға бағышланған шиғыр ятланы, "Яратҡан тәрбиәсем" тигән темаға һүрәт төшөрҙө. Конкурстың еңеүселәрен "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк бүлексәһендә бүләкләнеләр, уларҙы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Йомабикә Ильясова тапшырҙы.

**Совет районы.** "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Реаль эштәр" төбәк проекты сиктәрендә ҡала халҡының теләктәрен тормошҡа ашырыу дауам итә. Был аҙнала Совет районында бер юлы өс балалар һәм спорт майҙансығы асылды. Әй, Злобин урамдарында, Октябрь проспектында асылған яңы майҙансыҡтар балаларға буш ваҡытын асыҡ һауала файҙалы итеп үткәрергә мөмкинлек бирә.

**Орджоникидзе районы.** Мәскәүҙә туған тел уҡытыусыларының Бөтөн Рәсәй мастер-класы финалы үтте. Унда Рәсәйҙең 43 төбәгенән 182 ғариза бирелгәйне, ситтән тороп үткәрелгән турҙан һуң финалға үтеүсе 40 кеше Мәскәүгә йыйылды. Башҡортостандан Орджоникидзе районының 71-се мәктәбе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фәнис Фәйзулла улы Шәрәфетдинов ҡатнашты һәм махсус диплом менән бүләкләнде.

**Октябрь районы.** Урамда сүп ташлап киткән кешеләр, йәмәғәт урындарында тәмәке тартыусылар, тейешһеҙ урында юлды аша сығыусылар менән нисек көрәшергә? Октябрь районының "Балалар плюс" үсмерҙәр клубтары ағзалары үҙҙәренең граждандар позицияһын күрһәтеп, үҙ ҡулдары менән флаер-листовкалар яһаған. Улар ике көн буйына "Башҡортостан" сауҙа үҙәге, "Спорт", "Дәүләт циркы" туҡталыштарында, һупайлы бисҭәһендә "Минә барыбер түгел" тип аталған акция үткәрҙе һәм граждандарҙы йәмәғәт тәртибен һаҡларға, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барырға, тирә-йүндәгеләргә ихтирамлы булырға саҡырған листовкалар таратты.

**Ленин районы.** 12-14 ноябрҙә Конгресс-холл бинаһында "Күсемһеҙ милек. Көҙ - 2015. Йорт, фатир. дача" күргәҙмәһе һәм IV Инвестициялар, күсемһеҙ милек һәм девелопмент форумы үтә. Унда күсемһеҙ милек баҙарында эшләгән кешеләр саҡырыла. Дәүләт хеҙмәте экспертары кредит, ипотека, һалым буйынса түләүһеҙ консультациялар үткәрәсәк. Форумда иһә тәжрибә уртаҡлашыу мөмкин буласаҡ, республиканың төҙөләш өлкәһендә булған һорауҙар ҡараласаҡ.

**Калинин районы.** Райондың 74-се мәктәбендә урынлашҡан Георгий Мушников исемендәге музейҙың иң яҡшы экскурсоводтары геройҙың тыуған яғы - Бөрө ҡалаһына сәйәхәт ҡылды. Унда улар Советтар Союзы Геройы белем алған 1-се мәктәпкә барҙы. Мәктәп директоры, "Комбат" эҙләү отряды командирынан Мушников тураһында күп мәғлүмәт ишетте. "Яңылыҡтар Самолеты" телевидениеһы корреспонденттары геройҙың туғандарынан интервью алды.

**Дим районы.** Районды халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәге 10 айҙа башҡарған эштәренең һөҙөмтәләрен барланы. Был ваҡыт эсендә төрлө, шул иҫәптән беренсе тапҡыр эш эҙләгән граждандарҙы, балиғ булмағандарҙы ваҡытлы, физик мөмкинлектәре сикләнгәндәрҙе махсус йыһазландырылған урындарға эшкә урынлаштырыу йүнәлешендә әүҙемлек күҙәтелгән. Уҡыуҙан буш ваҡыттарында уҡыусылар мәктәп эргәһендәге майҙансыҡтарҙа ярҙам иткән, эшләп бөткәндән һуң уларға матди ярҙам күрһәтелгән.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ИМЕНЛЕК НИГЕҘЕ - АУЫЛ



**Башҡорт дәүләт аграр университетының Йәштәр һарайында Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте хеҙмәткәрҙәре көнө уңайынан ойошторолған тантаналы ултырыш булып үтте. Унда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты.**

- Был залда ултырған һәр кем иң изге һүҙҙәргә лайыҡ. Һеҙҙең хеҙмәтегеҙ - республиканың именлеге нигеҙе. Башҡортостан аграрийҙары эше илдең "Алтын көҙ" ауыл хужалығы күргәҙмәһендә тағы ла бер тапҡыр юғары баһаланды. Беҙҙең хеҙмәтсәндәр 420 миҙалға лайыҡ булды, уларҙың 287-һе - алтын, - тине Рөстәм Зәки улы.

Республика башлығы билдәләүенсә, быйыл 3,2 тонна иген йыйылған, был былтырғыға ҡарағанда 600 мең тоннаға күберәк. Ашлыҡ һуғып алыу буйынса республика илдә 16-сы урында 10-сы урынға, ә Волга буйы федераль округында 4-се урында 2-се урынға күтәрелгән. Республика аграрийҙарына ҙур уңыштарға өлгәшергә федераль һәм республика бюджеты ярҙам күрһәтә. Быйыл ярҙам күләме 6,5 млрд һум тәшкил иткән. Шул уҡ ваҡытта, ауыл хужалығы өлкәһендә әлегә тулыһынса ҡулланылып етмәгән резервтар барлығы ла әйтелде. Хужалыҡтарҙы техник һәм технологик йыһаздар менән тәьмин итеү, ауыл хужалығы фәнен үҫтереү, фермер хужалыҡтарын арттырыу, эре мөгөҙлө мал үрсетеү үҙәктәрен булдырыу, иген етештереү, шәкәр сөгөлдөрөн эшкәртеү, малға заманса туҡлыҡлы аҙыҡ әҙерләү өлкәләре артабан да үсеш юлында булырға тейеш.

- Баҫыуҙан - магазин кәштәһенә сылбырын төҙөү, ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүселәргә улар өсөн ҡулайлы хаҡтар менән тауарын һатырға ярҙам итеү йәһәтенән эшләйһе эштәр бар. Был бурысты әлегә ауыл хужалығы йәрминкәләре башҡара, - тине Рөстәм Хәмитов. - Тиҙ арала аграр брендтарҙы Евразия иҡтисади берләшмәһенә, Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһына, БРИКС берләшмәләренә сығарырға кәрәк. Белеүегеҙсә, быйыл саммиттар ваҡытында килгән ҡунаҡтарҙы үҙебеҙҙә етештерелгән ризыҡтарҙы менән һыйланыҡ. Уларға беҙҙең ризыҡтар оҡшай, тик ни өсөн беҙ уны уларға тәҡдим итмәйбеҙ - был ҙур һорау.

Рөстәм Хәмитов ауыл хужалығы продукцияһын етештереүҙә юғары күрһәткестәр күрһәткәне өсөн республиканың иң яҡшы биш районын - Әбйәлил, Мәләүез, Краснокама, Мәсетле, Саҡмағоштарҙы БР Хөкүмәте дипломдары менән бүләкләне.

## БЕҘ ТӨРЛӨБӨҘ

**4 ноябрҙә Өфөнөң Конгресс-холл бинаһында Халыҡтар берҙәмлеге көнөнә арналған тантаналы йыйылыш булып үтте. Уны Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы ойоштороҙо.**

2005 йылдың 4 ноябренән рәсми рәүештә билдәләнә башлаған был байрам Мәскәүҙе поляк баҫҡынсыларынан азат итеү менән бәйле Рәсәй тарихындағы иң мөһим сараларҙың береһе. 1612 йылдың 4 ноябрендә Кузьма Минин менән Дмитрий Пожарский етәкселегендәге халыҡ ополченииеһы яугирҙары штурм менән Ҡытайгородты алып, Мәскәүҙе поляк интервенттарынан азат итә һәм был ваҡиға бөтөн халыҡтарҙың сығышына, диненә, йәмғиәттәге хәленә ҡарамайынса, бергә ойошоу һәләтенә эйә икәнлеген дәлилләй. 1649 йылда батша Алексей Михайлович ҡарары менән 4 ноябрь дәүләт байрамы тип иғлан ителә. Әммә совет власы урынлашҡандан һуң, Мәскәүҙе поляк баҫҡынсыларынан азат итеү йолаһы онотола. Шуға ла Халыҡтар берҙәмлеге көнө - яңы байрам түгел, ә боронғо традицияларға әйләнеп ҡайтыу ғына. "Был көн тарихыбыҙҙың героик биттәрен ҡабаттан хәтеребеҙгә төшөрә. Төрлө диндәге, милләттәге, ҡатламдағы кешеләр ирек һәм тыуған илдең именлеге өсөн ватанды сит ил баҫҡынсыларынан азат итә. Был йыраҡ йылдарҙа башҡорттар ҙа, төбәктең башҡа милләттәре лә Мәскәүҙе ҡотҡарыусы сараларҙа ҡатнашҡан. Ата-бабаларыбыҙҙың илһөйәрлеге бөгөн дә милләттәр берҙәмлеген нығытыу, ватаныбыҙҙы артабан үҫтереү эшмәкәрлегендә дауам итә", - тине тантаналағы сығышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов.

Тантаналы йыйылыш башланыр алдынан Конгресс-холл алдындағы майҙандан милли кейемдәрҙәге төрлө милләт вәкилдәренең марш-парады үтте. Был көндә башҡа төрлө ижтимағи-сәйәси, мәҙәни, спорт саралары ла ойошторолдо. "Ватан" паркы территорияһында баш ҡаланың уҡыу йорттары студенттарын берләштергән "Берҙәмлек" тигән флеш-моб та бик ҡыҙыҡлы булды. Ҡала мәҙәниәт һарайында "Берҙәмлектә беҙҙең көсөбөҙ" тип аталған байрам программаһында ҡаланың алдынғы коллективтары сығыш яһаны.

## КӨТӨП АЛЫНДЫ

**Белорет районында ҡала ситенән үткән Стәрлетамаҡ - Белорет - Магнитогорск автомобиль юлы участкаһының икенсе сиратын төҙөү тамамланды. Белорет - Өфө, Белорет - Магнитогорск һәм Белорет - Учалы - Миәс автомобиль юлдарын тоташтырыусы 21,2 саҡрымлыҡ урау юл файҙаланыуға тапшырылды.**

Автомобиль юлын һалыу 2006 йылда башланғайны. 11,2 саҡрымлыҡ тәүге участка 2011 йылдың октябрендә асылды. 2015 йылда икенсе сиратты төҙөү өсөн федераль бюджеттан 408 миллион һум аҡса бүленде. Бер нисә ай эсендә Ҡаҙыш ауылы эргәһендә Белорет - Өфө трассаһы менән тоташтырыусы ун саҡрымлыҡ участка төҙөлдө. Бынан тыш, Белорет - Учалы - Миәс автомобиль юлына һәм Ломовка ауылына инеү юлы һалынған. Шулай итеп, урау автомобиль юлы Белорет ҡалаһы ситенән транзит транспорты ағымын үткәрергә мөмкинлек бирҙе.Ошо осорҙа Ағиҙел һәм Боғанаҡ йылғалары аша ике күпер, Пугачев карьеры янындағы тимер юлы аша юл үткәргес төҙөлдө. Электр тапшырыу, газ торбаһы линиялары, элемтә кабелдәре күсерелде һәм үҙгәртеп ҡоролдо. Урау автомобиль юлын асыу тантанаһында ҡатнашыусылар был ваҡиғаның Белорет халҡы өсөн генә түгел, республикала һәм күрше төбәктәрҙә йәшәүселәр өсөн дә социаль әһәмиәтле булыуын билдәләне. Белорет ҡалаһы ситенән үткән урау юл ҡала урамдарында транзит транспортын кәметергә, ҡалала экологик хәлде яҡшыртырға, юл-транспорт хәрәкәте хәүефһеҙлеге кимәлен арттырырға, биләмәнең инфраструктураһын һәм тораҡ пункттар араһында транспорт бәйләнешен яҡшыртырға мөмкинлек бирәсәк.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Төркиәнең "Gursel" ("Гюрсель") компанияһы етәкселеге һәм инженерҙары менән баш ҡала хакимиәте вәкилдәренең осрашыуы булды. Унда "Метробус" транспорт системаһын төҙөү проектын тормошҡа ашырыу мәсьәләһе тикшерелде. Метробус - автобусты һәм метроны берләштереү юлы менән барлыҡҡа килтерелгән экологик йәмәғәт транспорты. Был система Көньяҡ һәм Төньяҡ Америкала, Истанбулда ҙур популярлыҡ менән файҙалана.

✓Башҡортостанда, илдең башҡа төбәктәрендәге кеүек үк, Бөтөн Рәсәй географик диктанты уҙҙы. Акцияла республикабыҙҙан 700-ҙән ашыу кеше ҡатнашты. "Минең илем - Рәсәй" диктанты М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында һәм Башҡорт дәүләт университетында, шулай уҡ Белоретта үтте. Диктант һөҙөмтәләрен 10 декабрҙә Рус география йәмғиәте сайтынан ҡарап белергә мөмкин.

✓Башҡорт дәүләт университеты абитуриенттарҙы һәм уларҙың ата-әсәләрен Асыҡ ишектәр көнөнә саҡыра. Сара 7 ноябрҙә уҡыу йорттоң төп корпусында уҙғарыла. Сара көндөҙгө сәғәт 12-лә башлана. Белешмә өсөн телефон: (347) 229-97-21. Электрон почта: abiturient-bsu@yandex.ru.

✓Башҡортостанда торлаҡҡа хаҡтар төштө. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, 2015 йылдың III кварталында беренсел торлаҡтың квадрат метрының хаҡы - 51,1 мең, икенсел торлаҡтың 54,9 мең тәшкил иткән. Ошо йылдың II кварталында "беренсел" - 51,7 мең (III кварталда 0,7 процентҡа кәмегән), "икенсел" 55,7 мең һум (2,2 процент) торған.

✓Башҡортостанда туризм индустрияһы Яңы йылға әҙерләнә. Туроператорҙар башҡорт Ҡыш бабайының йортона маршрут төҙөй, күпселек отелдәрҙар ташлама яһарға әҙер.Төп йорттоң ҡайҙа урынлашасағы 9 ноябрҙә конкурсҡа йомғаҡ яһағанда билдәле буласаҡ. Унда Өфө эргәһендәге райондар ҡатнаша. Бәйге шарттары буйынса Ҡыш бабайҙың резиденцияһы баш ҡаланан 150-160 саҡрым алыҫлыҡта урынлашырға тейеш.

✓28 октябрҙә Өфө ҡалаһының мәҙәни-ял итеү үҙәгендә башланған Башҡорт Юниор КВН лигаһы III миҙгеленең зона фестивале лидерҙары билдәләнде. Бына улар: Республика башҡорт лицей-интернаты ("Башҡорттар.ру" командаһы), Әбйәлил районы Хәмит ауылының урта дөйөм белем биреү мәктәбе ("Хәмит" командаһы), Өфөнөң 159-сы мәктәбе ("Хыялый зыялыйҙар" командаһы).

✓ *Варшава ҡасаҡ статусын, 4 мең тирәһе һораусынан, ни бары 6 (!) украин кешеһенә генә биргән. Был һандың Рәсәйгә килеп, үҙенә мөйөш тапҡан 2,6 миллион Украина гражданы менән сағыштырғанда, ниндәй көлкө икәнлеге күренеп тора.*



*ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ*

# ЙӨКМӘТКЕЛЕ ҺҮҘ МӨҺИМЕРӘК

**Фән, ғәмәл, йәшлек. Был өс төшөнсә бер-береһенә ни дәрәжәлә яҡын тора икәнлеген 27 октябрҙә Башҡорт дәүләт аграр университетының Йәштәр мәҙәниәт һарайында үткән "Йәштәр - башҡорт халҡының стратегик ресурсы" тип исемләнгән төбәк-ара йәштәр кәңәшмәһендә самалап булғандыр.**

21 ноябрҙә үтәсәк IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына арналған был сараны Ҡоролтай ҡарамағындағы Йәштәр советы ойошторҙо. Унда республиканың төрлө район-ҡалаларынан, Өфөнән алдынғы ҡарашлы йәштәр, шулай уҡ йәштәр менән әүҙем аралашҡан ағай-апайҙар килгәйне.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Хәләф Ишморатовтың сығышы кәңәшмәгә кәрәкле йүнәлеш бирҙе. Ил ағаһы билдәләүенсә, бөгөнгө йәштәрҙә тау аҡтарырҙай теләк көслө, әммә берҙәмлек юҡ. Ошо хәл буйынса ла, мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу, йәш ғаиләләрҙең социаль хәле проблемалары буйынса ла, йәштәр аңында ситтән ярҙам өмөт итеү психологияһының нығына барыуына ла борсолоу белдерҙе Хәләф Хәлфетдин улы.

Ҡоролтай ҡарамағындағы Йәштәр советы рәйесе Рәмзил Байназаров, "Теле юҡтың - иле юҡ, иле юҡтың - көнө юҡ", тигән халҡыбыҙ мәҡәлен иҫкә төшөрҙө һәм башҡорт ауылдарында мәктәптәрҙе һаҡлау зарурлығын билдәләне, ошо тәңгәлдә Йәштәр советының ҡайһы бер эштәре менән таныштырҙы. Мәҫәлән, Белорет районы Мәхмүт ауылындағы урта мәктәпкә 9 йыллыҡ итеп ҡалдырылыу ҡурҡынысы янағас, улар республика Башлығына мөрәжәғәт итеп, урындағы халыҡтың был ҡарар менән риза түгеллеген белдергән һәм мәктәпте һаҡлап ҡалған. Йәштәр Советы рәйесе Торатау менән Йөрәктауға янаған ҡурҡынысты ла телгә алды. Йәштәр советы рәйесе урынбаҫары Рифат Бикҡоловтың сығышы ла ҡыҙыҡлы булды. Ул ғаиләлә ир балалар тәрбиәләү темаһын күтәрҙе.

"Ир балаларҙы ғаиләлә - атай кеше, мәктәптә - ир уҡытыусылар тәрбиәләргә тейеш", - тине ул.

Пленар ултырыштан һуң кәңәшмәлә ҡатнашыусылар 6 секцияла йәштәр проблемалары буйынса фекер алышты. Уларҙа башҡорт йәштәренең әҙәбиәттә, мәҙәниәттә, эшҡыуарлыҡта, дини сараларҙа, ижтимағи тормошта ҡатнашыуы тураһында һүҙ барҙы. Кәңәшмә һуңында 23 пункттан торған резолюция проекты ҡабул ителде.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Кәңәшмәлә сығыштар ике телдә яңғыраны. Был да күңелгә май булып яғылды. "Йәштәр аҡыллы итеп туған телдә фекер алыша", - тип ҡыуанып та өлгөрөлмәне, бер бик зыялы ғына ағайҙың: "Йәштәрҙең сығыштарында ҡолаҡҡа ятышһыҙ һүҙҙәр шул тиклем күп булды. Бер егет "дәртем яна", тип әйтеп һалды хатта. Дөрөҫө "дәртем таша" була ла инде", - тип эләктергәне ҡолаҡҡа салынып ҡалды. Күрәһең, был ағай сығыштарҙың эстәлегенә ҡолаҡ һалмаған, ә телмәрҙәге хаталарҙы байҡап ултырған. Ә йәштәр хәтеренә барыбер ҙә был сарала һөйләнгәндәрҙең йөкмәткеһе һеңеп ҡалғандыр, тип ышанғы килә.**

**Иҙел РӘХИМОВ.**
**(Йәштәр темаһын 8-9-сы биттәрҙәге ҡорҙа уҡығыҙ).**



*Эдуард Дилмөхәмәтов фотоһы.*

*КӨН ҠАҘАҒЫ*

# ТАҒЫ ЛА ҠАСАҠТАР ТУРАҺЫНДА



**Күптән түгел Евросоюз һәм Рәсәйҙең Федераль миграция хеҙмәте Европа илдәренә Сирия һәм башҡа төбәктәрҙән һәм Рәсәйгә Украинанан ҡасып килеүселәрҙең рәсми һаны тураһында мәғлүмәт бирҙе. Тәүгеләре иҫәпләүҙе ағымдағы йылдың башынан алып барһа, Рәсәй миграцион хеҙмәте 2014 йылдың апрель айынан иҫәпләгән. Статистика, әлбиттә, тәү ҡарашҡа, күңелһеҙ әйбер, ләкин иғтибарлап ҡарағанда, ул үҙ эсенә бик күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәт һыйҙыра.**

Европала ҡасаҡтар тирәләй ҡупҡан шау-шыуҙың шаңы бөтә Ер шарын һелкетеүен дауам итә. Ә шул уҡ ваҡытта Украинанан Рәсәйгә тыныс тормош эҙләп килеүселәрҙең һаны көндән-көн артыуы тураһында барыһы ла ләм-мим. Сағыштырыу өсөн әлеге лә баяғы статистикаға күҙ һалайыҡ. Евросоюз составына ингән илдәргә, ағымдағы йылдың башынан сентябрь аҙағына тиклем 710 мең ҡасаҡ килгән. Ләкин бында уларҙың икешәр тапҡыр һаналыу мөмкинлеге лә бар, тигән төҙәтмәгә айырыуса иғтибар итергә кәрәктер. Әгәр ҙә, ысынлап та, бер кешене ике тапҡыр һанаһалар, ҡасаҡтарҙың дөйөм һаны 355 меңгә тиң килеп сыға. Ошо һан бөтә Евросоюз илдәрендә паника тыуҙырҙы, сиктәрен ябыуға этәрҙе. Ангела Меркель хатта Төркиәгә барып, Реджеп Эрдогандан ҡасаҡтарҙы Европаға үткәрмәүен һорап ҡайтты. Ә быныӊ өсөн ул Төркиәнең Евросоюзға инеүе тураһындағы һорауҙы тиҙләтергә вәғәҙә бирҙе. Үәт бит әй, әле ҡасан ғына ошо уҡ ханым Төркиәнең ЕС-ҡа инеүенә ҡаршы сыҡҡан иң әүҙем сәйәсмәндәрҙең береһе ине. Ниндәйҙер хәүеф икенсе берәүгә янағанда уға ярҙам итеү түгел, уның үҙен бысраҡҡа болғап һалып ҡуйырға ла күп һорамай былар. Ә инде хафа үҙ ҡапҡаһына килеп етһә, ошо уҡ кешегә ярҙам һорап йүгерә. Көнбайыш менталитеты сағылышымы был? Әллә башҡа төрлө күренешме, беҙгә аңлауы ҡыйын. Аңлаған булһаҡ, Украинанан 2,6 миллион ҡасаҡты бер һүҙһеҙ ҡабул итеп ятмаҫ инек, моғайын.

Мәҫәлән, шул уҡ Американы алып ҡарайыҡ. Европаны ошондай хәлгә ҡуйған ваҡиғаларҙың сәбәпсеһе бөгөнгө көнгә 10 мең генә (!) ҡасаҡты ҡабул итеү тураһындағы һорауҙы ҡарарға әҙер булыуы тураһында белдерҙе. Иғтибар: ҡабул итергә түгел, ә мәсьәләне ҡарарға ғына. Ә улар кемде ҡабул итергә, ә кемде юҡ икәнлеген хәл иткәнсе, ҡасаҡтар 18 айҙан 24 аҙнаға тиклем ғүмерҙәрен ҡасаҡтар өсөн лагерҙа үткәрергә тейеш була. Ике йылға тиклем асыҡ һауалағы палаткалар ҡаласығында көн итеүгә кемдең дә түҙемлеге бөтөр - бына инде бәрелештәргә, ғүмер өҙөлөүҙәргә алып барыусы тағы бер юл. Америка юлын Польша ла "ҡыуа". Украинаның Европаға ынтылышын бар яҡлап хуплаусы һәм яҡлаусы был ил бер ҙә үҙенә Украина граждандарын һыйҙырырға ашыҡмай. Ышанаһығыҙмы-юҡмы, Киевта 2014 йылда дәүләт боролошон ойоштороуға ҡотортоусыларҙың береһе булған Варшава ҡасаҡ статусын, 4 мең тирәһе һораусынан, ни бары 6 (!) украин кешеһенә генә биргән. Был һандың Рәсәйгә килеп, үҙенә һәм ғаиләһенә мөйөш, эш, йәшәү өсөн шарттар тапҡан 2,6 миллион (рәсми рәүештә теркәлгәндәр) Украина гражданы менән сағыштырғанда, ниндәй көлкө икәнлеге асыҡ күренеп тора. Ошо 3 миллион тирәһе ҡасаҡты урынлаштырыуға, ашатыуға, торлаҡ табыуға, медицина хеҙмәтләндереүенә Рәсәй 11 миллиард һум аҡса бүлгән. Ә ошо ваҡиға килеп сыҡмаһа, күпме аҡса үҙебеҙҙең граждандарға, уларҙың социаль һәм башҡа өлкәләрҙәге мәсьәләләрен хәл итеүгә тотонолор ине.

Украинанан килгән ҡасаҡтар Рәсәй халҡының (146 миллион) яҡынса 1,8 процентын тәшкил итә. Тимәк, 500 миллионлап халҡы булған Евросоюз беҙҙең кеүек үк, бер ниндәй сәбәптәргә лә һылтанмайынса, 8,9 миллион ҡасаҡты ҡабул итә ала ла бит. Ләкин улар тимерсыбыҡлы ҡоймалар төҙөп, ҡасаҡтарҙы индермәүҙе хуп күрә. Улай ғына ла түгел, йөҙәрләгән мең кешене кире билдәһеҙлеккә, хәйерселеккә, үлемгә һөрөү тураһында пландар ҡора. Был осраҡта тамаҡ ярып толерантлыҡ тураһында һөйләүҙән ни файҙа ла, ни фәтүә?..

**Гөлназ МАНАПОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Гастриттан

❖ Гастрит - ашҡаҙандың лайлалы тиресәһе шешеүе мәлендә ошондай бутҡа файҙалы: 1 стакан һоло онтағына 1,5 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 5 минут бешерергә, 2 стакан һөт өҫтәп, тағы ла 5 минут ҡайнатырға. Бутҡа бер аҙ ғына һыуынғас, ярты лимондың һутын һығырға. Болғатырға һәм иртәнге аш урынына 2 аҙна буйы ашарға.

### Үпкәләр шешкәндә...

❖ 4 баш һарымһаҡ менән 1 лимонды ит турағыстан үткәрергә, 8 ҡалаҡ бал өҫтәргә. 7-10 көн буйына иртән ас ҡарынға 1-әр балғалаҡ ашарға.

### Авитаминоз

❖ 2 ҡалаҡ әлморонға 1 стакан һыу ҡойоп, талғын утта ҡайнау хәленә еткерергә. Һөҙөргә, һыуытырға, 1 стакан лимон һуты өҫтәргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда яртышар стакан эсергә.

### Тын юлдары

❖ Тын юлдары ауырыуҙарын профилактикалау өсөн керәнде ҡырғыстан үткәреп, банкаға һалығыҙ. 15 минуттан ҡапҡасты асып, һулағыҙ. 2-3 минут тын алмай тороғоҙ һәм танау аша тынды сығарығыҙ.

### Нервылар системаһы

❖ Нервылар системаһын нығытыу өсөн: 20 грамм бөтнөк (мята) япраҡтары, 25 грамм бесәй үләне тамыры (корень валериана), 50-әр грамм мәтрүшкә (душица), ҡандала үләне (донник), энәлек сәскәләрен (цветки боярышника) ҡушып болғатығыҙ. 2 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоғоҙ, төнәтегеҙ. Ашар алдынан сәй менән ҡушып ярты стакан эсегеҙ.

### Күҙҙәргә дауа

❖ Күреү һәләте насарланыуын һиҙһәгеҙ, түбәндәгесә дауалана алаһығыҙ. 1 стакан кишер һутына 2 ҡалаҡ бал өҫтәп, көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ 1 стакан һыуға 1 ҡалаҡ һырғанаҡ емеше (облепиха) һалып, 3 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә. Йылы көйөнсә иртәле-кисле ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# АҠҠОШ ИТЕ ХАРАМ

**Аҡҡош итен ашау тыйыла башҡортта. Этнографик тикшеренеүҙәр мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, был тыйыу бөгөн дә көсөндә.**

Был турала "Урал батыр" эпосында әйтелә һәм тыйыуҙың сәбәбе аңлатыла:

*Һомай тоҡомо ҡоштар, тип*
*Бер туғандай күрешеп,*
*Ау аулауҙан тыйышып,*
*Аҡҡош тотоп еймәҫкә, тип,*
*Үҙ-ара һүҙ ҡуйышып.*
*Аҡҡош үрсеп киткән, ти,*
*Аҡҡош ите кешегә*
*Шуға харам икән, ти.*

Күп халыҡтарҙа аҡҡошҡа ҡул күтәреү - үҙ әсәңә зыян килтереү менән бер. Шул уҡ ваҡытта, фольклор һәм этнографик материалдарҙа быны киреһен раҫлаусы сюжеттар ҙа осрап ҡуя.

Мәҫәлән, башҡорттарҙа "Аҡҡош күрһәң, атып ал, былбыл күрһәң, һатып ал" тигән мәҡәл бар. "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосында (М. Ғафури варианты) Заятүләктең һунар ыласыны ете аҡкошто һуғып төшөрә. Атаһы быны өсөн улына күп бүләктәр бирә. "Урал батыр" эпосында Йәнбирҙе ҡатыны һәм улдары менән аҡкоштарға һунар итә. Бер ваҡыт улар ауға эләккән аҡкошто ашарға теләй. Әммә ул кеше булып өндәшә:

*Мине бүлеп ашап та,*
*Сәйнәп мине йотоп та,*
*Барыбер аш булмамын,*
*Һис аш булып һеңмәмен:*
*Йәнишимәнән һыу алып,*
*Әсәм тәнем йыуҙырған...*

М. Сәғитов мәғлүмәттәре буйынса, борон башҡорттарҙа һунарҙа аулаған аҡкошто абруйлы кешеләргә бүләк итеү йолаһы булған. Улар изге ҡоштон итен бешереп ашаған. Ишембай районында "Аҡкош изге ҡош, аҡкош ите - изгеләр аша" тигән әйтем бар. Ошондай уҡ йола Көньяҡ Себерҙең төрки телле халыҡтарында осрай. Тываларҙа аҡкош үлтергән кеше уны муйынына аҡ таҫма йәки тире арҡан бәйләп, үҙенең ырыуҙашына бүләк иткән. Быны өсөн ул унан үҙе мохтаж булған нәмәне, мәҫәлән, болан һорай алған. Аҡкоштоң итен тирмә хужаһы туғандары менән ашаған. Йәғни, тотем ҡоштоң муйынын биҙәп, уны "ҡунаҡҡа алып киләләр", уға "бүләк бирәләр". Тотем ҡоштоң итен ашау яны тормош башлау моделе булараҡ ҡабул ителгәне лә билдәле. Башҡорттарҙа ла аҡкош бүләк итеү һәм тотем ҡоштоң итен ашау йолаһын ошо рәүешле аңлатырға була. Был йола ярсыҡтары боронораҡ изге ҡоштоң мәрхәмәтенә лайыҡ булыу һәм уның тоҡомондоң иҫәбен арттырыуына булышлыҡ итеүенә ышаныу өсөн махсус байрамдарҙа башҡарылған булырға тейеш. Тываларҙа аҡкош тушкәһен ҡыҙ һоратырға барғанда үҙҙәре менән алып баралар.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

---

УЙҘАРЫМДАН УЙЫЛАМ...

**Ҡыҙыҡ заман килеп етте: бала йә үтә ҡәҙерле, йә бер кемгә лә кәрәге булмаған артыҡ йән. Сабыйға уҙа алмағандар менән быуа быуырлыҡ, шул уҡ ваҡытта уларҙы үлтереп, ташлап китеү күренештәре көн һайын тигәндәй ҡабатланып тора. Педофилдар ҙа күбәйеп китте. Ауыр бөгөн бала-сағаға...**

# БАЛАҢА СЕРҘӘШ БУЛ!



### Тиҙ ышаныусандармы?

Әле беҙ үҫкәндә генә урамда иркен уйнай, йылан-ҡырҙарҙан, йылға буйҙарынан ҡайтып инмәй инек. Эт тешләүҙән, һағыҙаҡтан, кесерткәндән сағылыу, ата ҡаҙ баҫтырыуынан яманыраҡ зыян күрмәнек. Хәҙер ни, күршенән дә шикләнә торған заман килеп етте. Баланы бер нисә метрға ла яңғыҙ ебәреү хәтәр. Хәйер, ундай хәүеф-хәтәр элегерәк тә осрамай тормағандыр инде - белмәйем. Һәр хәлдә, әсәйем менән атайымдың ҡалаға интернат-гимназияға оҙатҡанда, таныш булмаған кеше саҡырһа, янына барма, әйткән һүҙҙәренә ышанма, тип ҡат-ҡат тылҡып ебәргәне иҫемдә. Туҡһанынсы йылдар ине. Бишенсе класс уҡыусыһы ғына булһам да, яҡындарымдың әйткәнен ҡолағыма нык ҡына киртеп ҡуйҙым. Юғары кластарҙа ла ҡала урамдарына тәрбиәсенән һорап ҡына, дәфтәргә ҡултамға ҡуйып ҡына сыҡтыҡ. Хәҙерге бала-саға тиҙ ышаныусанмы, әллә ата-әсә яуапһыҙыраҡмы? Әллә беҙ үҫкәндә бигүк күҙгә салынып бармаған ҡот осҡос әҙәм заттары күбәйҙеме?

### Артыҡ ун биш мең

Һүҙҙе баланың эскерһеҙлегенән башлайыҡ. Күптәрегеҙ беләләр, нимә өсөндөр мыжый башлаған баланың иғтибарын бүтән нәмәгә йүнәлтһәң, ул ни өсөн бәлә һалғанын оноторға әҙер генә тора. Ана ҡош осоп бара, бесәй китеп бара, тундырма, чупа-чупс, киндерсюрприз.... Ниҙер вәғәҙә итһәң, ышаныр көтөп йөрөй. Серле һандыҡ эҙләү, ниндәйҙер ролдәргә инеү, берәй көтөлмәгән сюрприз эшләү, шаҡ ҡатырыу кеүек уйындар ярата. Сер һаҡлай белә. Асыуын, үпкәһен тиҙ генә онота ла ҡуя.

Иптәше менән ғүмерҙә лә аралашмаҫлыҡ булғандай үпкәләшһә лә, иртәгәһенә һин дә мин уйнап йөрөүҙәре ихтимал. Хәшәрәт заттар уларҙың ошо сифаттары менән файҙалана ла инде. Әинде ҡыҙы йә улының көн дауамында кем менән аралашыуын, кемдең нимә әйтеүен йә вәғәҙә итеүен бөтә ололар ҙа белеп тора алмай. Быны өсөн бәләкәс менән тығыҙ мөнәсәбәттә булыу кәрәк. Йыш серләшеү, йыш аралашыу, йыш бергә булыу нык мөһим.

Ләкин мәңге эштән бушамаған атайәсәй балаһы менән яҡындан аралашамы икән? Арып-талып өйгә ҡайтҡан әсәйҙе кухня эштәре ҡосағына ала, шунан ятып ҡына ял иткеһе килә. Телевизор ҙа үҙенә иғтибар там итә. Балаһы ни, мәктәптән ҡайттымы - ҡайтты, ашанымы - ашаны, дәресе әҙерме - әҙер. Еткән инде шул. Хәҙер артыҡ бимазаламай ғына иртәрәк йоҡоға талһа - шул инде барлыҡ тәрбиә. Бөгөн әсәйҙең өйҙә булыуы ғаилә тылын тәртиптә тотоу өсөн бик мөһим тип һөйләүселәр күбәйҙе. Мөһим икәнен, бәлки, аңлайҙыр ҙа күптәр, мөмкинлек юҡ шул. Артыҡ ун-ун биш мең ғаилә бюджетына шаҡтай ҙур ҡушымта һанала. Бер уйлаһаң, Өфө ҡалаһы өсөн был сумма хәҙер аҡса ла түгел инде. Шулай ҙа көндән-көн артҡан аҙыҡ-түлек, торлаҡ, бензин өсөн бик тә ярап ҡала.

### Һине онотасаҡтар

Аҡса артынан ҡыумай сара ла юҡ. Күптәрҙең кеҫәһе көндәлек ихтыяждар өсөн ярайһы булған хәлдә лә, барыбер ул аҡса артынан ҡыуа. Эйе, барыбыҙҙың да тәмле ашағыбыҙ, ысын тиренән тегелгән аяҡ кейеме кейгебеҙ, иномаркаларҙа йөрөгебеҙ килә. Кеше бер рәхәткә өлгәшһә, тағы ла яҡшыраҡ тормош кимәленә менергә теләй. Шуға күрә ул бер ваҡытта ла бушамай. Бер мәсьәләһен хәл итһә, икенсеһе көтөп тора. Ә был ваҡытта балаларҙы һағалап йөрөүселәр аҙым һайын. Һеҙ хәшәрәт заттарҙы ғына әйтәһегеҙме? Сит илдәрҙә генә ятып та һөжүм итәләр хәҙер. Йәмһеҙ йәнһүрәттәр, психиканы ҡаҡшатыусы компьютер уйындары... Үҫмерлек ҡоронда төрлө еңел наркотиктарға, спиртлы эсемлектәргә ылыҡтырыу ҙа һөжүмдең бер төрө бит әле. Барыһы ла атай-әсәйҙең балаһы менән парктарға сығырға, сәйәхәт итергә, ҡыҙыҡлы туңәрәктәргә, файҙалы кисәләргә йөрөргә ваҡыты табылмау бәләһе, минеңсә.

Ә бала ҡыҙыҡты интернеттан таба. Мин бер башланғыс класс уҡыусыһының гуглдан "дети целуются" тип эҙләгәнен күреп, иҫем киткәйне. Шуның кеүек, ул күрергә, белергә теләгәнен ҡайҙандыр эҙләмәһен, үҙенсә һығымталар яһамаһын, дуҫтарын ғына абруй итмәһен өсөн эргәләге балаһына ла иғтибар бүлһен ине, тип теләргә ҡала. Эш эш менән... Эш урынында бер аҙна булма - һине онотасаҡтар. Хаҡлы ялға сыҡ, ғәфү итегеҙ - бер кемгә лә кәрәгең юҡ. Яҡындарыңдан башҡа...

### Әҙәм хәшәрәттәре

Википедияла был төр яуыздар хаҡында, психик ауырыу кешеләр, тип яҙғандар. Интернет ундайҙарҙың күбеһе үҙен тыя һәм ғәҙәти тормош менән йәшәй ала, тип тә мәғлүмәт бирә. Был сир баш мейеһенең һелкенеүе арҡаһында барлыҡҡа килә тип тә һығымта яһала. Нимә генә тимә, Хоҙай тарафынан шундай заттар ҙа яратылған, тип әйтәйемме... Бындай сирлеләрҙе ғалимдар ҙа тикшереп, хатта дауалап та ҡарағандар. Беҙгә улар хаҡында төбөнә төшөп, өйрәнеп ултырырға кәрәкмәй, әлбиттә. Шулай ҙа, ундай тайпылышлы кешелар Хоҙай ҡушҡан һәм тыйылғандарынан тайпылып, күп ваҡытын эске табындары артында үткәргән, теләһә ниндәй тормош менән йәшәгән атаәсәләрҙән тыуалыр. Бар шундай тәбиғәт хаталары, бар. Быны белеү, һаҡланыу зарур. Бала көн оҙоно кем менән аралашҡан, ниҙәр күргән, кисергән - барыһын да һорашырға кәрәк. Тик был биш-ун минут эсендә генә башҡарылмаһын. Беҙҙең, мәҫәлән, ошолай: ҡыҙымды мәктәптән барып алам да, ҡайтып еткәнсе һөйләшәбеҙ. Күберәк ул бытылдай. Шымып ҡалһа, үҙем һорашам. Ошо арала борсоуҙарын да, шатлыҡтарын да, ҡаҙаныштарын да белеп өлгөрәм. Берәй сере барлығын белһәм, әсәйгә генә белергә ярай ул, сис тә ҡуй, тип әйтәм. Бер кемгә лә әйтмәүемде белдерәм. Ышана саф күңелле балаҡай. Әлбиттә, ул сер хаҡында аҙаҡ берҙе лә телгә алмайым...

Эйе, күптәр матур итеп эшләп тә йөрөй, балаһын да ҡарап өлгөрә. Ҡыҫҡаһы, бар нәмәгә лә өлгөрә. Ләкин... Уларҙың ләкиндәре күп икәнен яҡшы беләм. Һәр кем үҙе һығымта яһар. Үҙең белмәгән ни эш бар.

**Гөлсинә БАЙҒУЖИНА.**

---

ӘЙ, ТУҒАН ТЕЛ!

# ТЕЛМӘРЕҢӘ ИҒТИБАР ИТ,

## йәки "аҡһаҡ" баҫымдар тураһында

**Йәмғиәттең телен баҫмалар, радио һәм телевидение формалаштыра. Халыҡ ташҡа баҫылғанға, яңғырап торған һүҙгә айырыуса нык ышана. Шуға күрә, журналистар үҙҙәре еткергән мәғлүмәт өсөн генә түгел, яҙған һәм һөйләгән һүҙе өсөн дә яуаплы. Хаталы һөйләгәндә көн дә тыңлап, ишетә йөрөгән кеше лә тора бара шул уҡ яңылыштарҙы ҡабатлай башлай. Был йәһәттән һүҙҙәргә дөрөҫ баҫым ҡуйыу мәсьәләһе бигерәк тә аҡһай, тип әйтер инем.**

Йыш ҡына баҫым кәрәк урында төшөрөп ҡалдырылып, кәрәк булмаған урынға ҡуйып һөйләүҙәрен ишетергә тура килә. Характерлы миҫал: -маҫ, -мәҫ ялғауҙары. Башҡорт теле ҡағиҙәләре китабында ҡылымдың юҡлыҡ формаһын белдергән -ма, -мә ялғауҙары баҫымһыҙ була, тип яҙылыуға яҙылған. Әммә һәр ҡағиҙәнең иҫкәрмәһе бар. Был осраҡта -маҫ, -мәҫ ялғауҙары һәр ваҡыт баҫымлы, йә баҫым һүҙҙең аҙағына күсә бара, тиген иҫкәрмә бирелгән. Мәҫәлән, бАрма, бАрмаһындар һүҙҙәрендә баҫым -ма ялғауы алдынан торған ижеккә, ә бармАҫ, бармаҫтАр һүҙендә -маҫ ялғауына, унан һуңғы ижеккә төшә. Ҡылымдың -маҫ, -мәҫ юҡлыҡ ялғауҙарының ҡыҫҡартылған формаһы ла баҫымлы: бармАм, бармАбыҙ. Бер ҡарауға бында -ма ялғауы ҡушылған кеүек тойола, ләкин улар бармАҫмын, бармАҫбыҙ һүҙҙәренең ҡыҫҡартылған формаһы. Әле башҡортса рекламала диктор: "Ысын ир егет отОлмаҫ",- тип әйтеп ҡуя. Күренеп тора, отолмАҫ тип әйтелергә тейеш. Баҫымды дөрөҫ ҡуя белмәү башҡорт теленә әллә ниндәй ҙур зыян килтермәй, уны әйләп төҙәтергә мөмкин. Ә шулай ҙа "аҡһаҡ" баҫымдарға ла иғтибарлы булыу кәрәк. Бигерәк тә радио-телевидение журналистарына.

**Вәкил ХАЖИН,**
**педагогика фәндәре кандидаты.**

✓ **"Урал мосолмандарының көнкүрешен сағылдырған йырҙары һәм музыкаһы" хеҙмәте 1897 йылда донъя күрә. Унда башҡорт музыка-шиғриәт фольклорына арналған бүлек - иң тулыһы һәм ҡыҙыҡлыһы.**



МӨҺИМ ВАҠИҒА

# БЫУАТТАРҒА ҺУҘЫЛҒАН ТАРИХ



**Тарихтан күренеүенсә, иҫәп алыу дәүләт идараһының бер элементы булып тора. Төрлө мәғлүмәттәрҙе тотош йыйыу зарурлығы һәм әһәмиәте һалым тәжрибәһе менән билдәләнә. Тарихи Башҡортостан территорияһында XVIII быуаттың башына тиклем даими халыҡ иҫәбен алыу тураһында раҫлауҙар булмаһа ла, яһаҡ йыйылыу факты үҙе үк халыҡ тураһында ниндәйҙер иҫәп алып барылыуын раҫлай.**

"Башгорд" тип аталған төрки халҡы" тураһындағы тәүге мәғлүмәттәр IX - XII быуаттағы ғәрәп һәм фарсы сәйәхәтселәренең юлъяҙмаларында осрай. Улар башҡорттар тураһында, Урал һырттарының ике яғынан, Волга һәм Кама, Тубыл һәм Яйыҡтың үрге ағышында ултырған үҙаллы халыҡ, тип яҙа. Башҡорттар ерҙе ырыуҙарға бүлә. Берәүҙәргә - тауҙар һәм урмандар, икенселәргә иркен яландар эләгә. Тәбиғәт шарттарына бәйле, халыҡтың тормош рәүеше һәм хужалыҡ итеү ысулы формалаша.

Руста территориаль-статистика теркәүҙе тәжрибәһе XV быуатта, Башҡортостан үҙ ирке менән Рәсәй составына ингәнгә тиклем барлыҡҡа килә. Теркәү кенәгәһе (писцовые книги), нигеҙҙә, хужалыҡ тәғәйенләнешендәге ер фондын асыҡлауға йүнәлтелә, шулай уҡ ул үҙҙәренә яҙылған ергә хоҡуҡтарын раҫлау кәрәк булған осраҡта юридик документ булып торған. Теркәү һәм иҫәп кенәгәләре, тарихи сығанаҡ буларак, үҙҙәренең әһәмиәтен әлегәсә һаҡлаған һәм бөгөн дә Рәсәйҙең иҡтисади, финанс, ҡатлам тарихын, уның матди көнкүрешен, шулай уҡ тарихи-статистик, тарихи-этнографик һәм колонизация мәсьәләләрен өйрәнеү өсөн мөһим әһәмиәткә эйә. XVI быуатта теркәү кенәгәләре даими төҙөлә. Өфө губернаһында теркәү кенәгәләренең аналогы булып яһаҡ кенәгәләре тора. 1630 йылда тотош тарихи Башҡортостанда яһаҡ кенәгәләре буйынса 888 башҡорт ауылы иҫәпкә алына, дүрт йылдан һуң 2,5 мең йорт асыҡлана. Был иҫәпкә һалымдан азат ителгән тарханлар (тоҡомдан килгән башҡорт хәрбиҙәре) инмәй.

Үҙенең идара итеү осоронда Петр Беренсе бер нисә контроль иҫәп алыу уҙғара, уларҙың иң билдәлеһе "ландратск" атамаһын ала. Әммә XVIII быуат йомғаҡтары йорттарҙың бушап ҡалыуын һәм уларҙың һаны кәмеүен күрһәтә. Петр реформаларынан башлап Руста йорт буйынса иҫәп алыу йән башын иҫәпкә алыу - халыҡ иҫәбен алыуҙың аналогы менән алмаштырыла. Иҫәп берәмеге булып ир заттары тора, һуңыраҡ ҡатын-ҡыҙҙы ла иҫәпләй башлайҙар. Һөҙөмтәлә XVIII быуат башында йорт иҫәбен алыу һалым түләүсе халыҡтың административ-финанс иҫәбен алыуға әйләнә. Иҫәп алыуҙың йәки ревизияның бындай ысулы 140 йыл дауам итә. Ошо осорҙа 10 ревизия уҙғарыла. Башҡортостан беренсе тапҡыр XVIII быуатта 5-се ревизияға ҡушыла. Шунан башлап уны бер ваҡытта ла игтибарһыҙ ҡалдырмайҙар. Йән башынан тыш, башҡорт йорттарын да иҫәпкә алалар.

**Әлфиә ИШМОРАТОВА.**
**(Дауамы бар).**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# "ТӘБИҒӘТТЕҢ МОҢО - ЙЫРҘАРЫНДА", -

## тигән Сергей Рыбаков башҡорт моңо тураһында

**Сергей Гаврилович Рыбаков (1867 йылдың 27 сентябрендә тыуған) күренекле рус музыкант-фольклорсыһы булған. Рәсәй Фәндәр академияһы заданиеһы буйынса ул илдең төрлө төбәктәренә бер нисә экспедиция яһаған, шул иҫәптән Башҡортостанға 1893, 1894 һәм 1896 йылдарҙа килгән.**





Уға беҙҙең яҡтар бик ныҡ оҡшай. Уралдың ғәжәйеп тәбиғәте башҡорт халҡының музыкаль-поэтик ижады үҫешенә ҙур йоғонто яһауына ышана ул. "Башҡорттар йәшәгән Урал тауҙары, уның тәбиғәте хозур, - тип яҙа Сергей Рыбаков. - Иҫәпһеҙһанһыҙ тауҙар теҙмәһе, туғайҙар, үҙәндәр, тарлауыҡтар бер-береһен алмаштырып, аҙым һайын тиерлек юлсыға берененән-береһе матурыраҡ күренештәр бүләк итә. Ошондай сихри тәбиғәт ҡосағында йәшәп, башҡорт фантазия һәм шиғри хыялланыу өсөн бай аҙыҡ таба һәм үҙенең моңло йырҙарын тыуҙыра, легендар үткәне һәм мөһабәт тауҙарҙың, иҡһеҙсикһеҙ яландарҙың һәм үткеһеҙ урмандарҙың хуш еҫе менән һуғарылған аһәңле көй ижад итә".

Бай экспедиция материалдары ғалимға ҡыҙыҡлы хеҙмәттәр яҙырға ярҙам итә. 1895 йылда ул "Ҡурай, башҡорт музыка ҡоралы" тигән тикшеренеүен тамамлай. "Урал мосолмандарының көнкүрешен сағылдырған йырҙары һәм музыкаһы" хеҙмәте 1897 йылда донъя күрә. Унда башҡорт музыка-шиғриәт фольклорына арналған бүлек - иң тулыһы һәм ҡыҙыҡлыһы. Китапта башҡорт һәм татар халыҡтарының 204 көйө бирелгән. Быны нисәмә тиҫтә йылдар инде төрлө быуын ғалимдары, фундаменталь тикшеренеү булараҡ, уға мөрәжәғәт итә.

Сергей Рыбаковтың үҙенең ижады ла өйрәнелә. Сәнғәт фәндәре кандидаты Людмила Петровна Атанова үҙ ваҡытында уның "Башҡорт әкиәттәре, хөрәфәттәре һәм ғөрөф-ғәҙәттәре" тигән ҡульяҙмаһына иғтибар итә. Ҡульяҙма Рәсәй География йәмғиәте архивында һаҡлана һәм быға тиклем уға тикшеренеүселәрҙең береһе лә иғтибар итмәгән була. Рыбаковтың 1894 йылда элекке Ырымбур губернаһының Орск һәм Верхнеуральск өйәҙҙәре башҡорттарынан яҙып алған ике әкиәте күсереп алына. Был "Батша улы Сиржатйән" һәм "Баһадир Ғәли" әкиәттәре. Рыбаков уларҙы башҡорттарҙан башҡорт телендә тынлаһа ла, русса яҙып алған. Батша улы Сиржатйән тураһындағы әкиәт тапҡыр, сос, тоғро һәм ҡыйыу ҡатын тураһындағы әкиәт сюжеты варианттарының береһе. Ул мажараларға бай, тылсымлы әкиәттәргә хас фантастика элементтары ла күп. Баһадир Ғәли хаҡындағы әкиәткә килгәндә (Рыбаков уның жанрын легенда йәкмәткеле хикәйә тип билдәләй), профессор Ғ.Б. Хөсәйенов уны, XVII-XVIII быуаттарҙағы боронғо китаптар буйынса билдәле ҡисса, тип атаны, унда баһадир Ғәли тураһындағы сюжет дини мосолман ауыҙ-тел ҡомартҡыһы формаһында әйтеп бирелгән. Баһадир Ғәли тураһындағы был ҡиссаның русса тәржемәһе билдәһеҙ булған. Шулай итеп, Л.П. Атанованың Рыбаковтың архив ҡульяҙмаһын тикшереүе башҡорт халыҡ ижадының элек билдәһеҙ булған өлгөләрен фәнни әйләнешкә индерергә булышлыҡ итте.

Бынан тыш, ғалим "Урал буйлап, башҡорттар араһында" тигән юлъяҙмалар, "Татар, башҡорт һәм типтәр халыҡ йырҙары тураһында" мәҡәлә һәм башҡа музыкаль-этнографик хеҙмәттәр яҙған. Рыбаковтың эҙләнеүҙәренең һәм тикшеренеүҙәренең дауамы булып уның тауыш һәм фортепиано өсөн башҡорт һәм татар көйҙәрен эшкәртеүе тора. Ул "50 татар һәм башҡорт йыры" йыйынтығын баҫмаға әҙерләгән. Йыйынтыҡтың бер өлөшө генә баҫтырып сығарылған. Шулай уҡ Башҡортостан буйлап йөрөгәндә йыйған башҡорт мәҡәләре, әйтемдәре һәм йомаҡтары ҡульяҙма көйөнсә ҡалған.

Өфөнөң Орджоникидзе районындағы урамдарҙың береһе (элекке Микоян) 1957 йылдың ноябрендә алып Сергей Рыбаковтың исемен йөрөтә. Был - башҡорт халҡының талантлы ғалимға ихтирам билдәһе.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Ҡаласыҡта кеше аҙ булып, насар төҙөлһә лә, был урын шундай иркен һәм матур, бында ҙур ҡала торһа ла оят булмаҫ ине. Табын йорто урынлашҡан киң үҙәндә баҫыуҙар бик уңдырышлы. Ағиҙел һәм Усолка ярҙарындағы бай туғайҙар малсылыҡ өсөн бик иркен. Тигеҙлекте уратып алған, урман менән ҡапланған йыраҡтағы тауҙар күҙгә йәм биреп, уҫал бурандарҙан ышыҡлап тороуҙан башҡа, төҙөлөшкә һәм башҡа ихтыяжға ярашлы ағас бирә.

Ҡала янынан ағып яткан ике йылға эсәр һыуҙан башҡа күнелле һәм килемле булған балыҡсылыҡ менән шөғөлләнеү мөмкинлеген бирә: Кама йылғаһына ҡойған Ағиҙелгә йәйен, ағасъяһаҡ, ҡылыс балыҡ, подуст кеүек төрлө балыҡтар күпләп килеп инә; ҡомло урындарҙа ташбаш, эстеш күп; бикре, сөгә, шулай уҡ һөмбаш балыҡтары һирәгерәк осрай, сөнки улар Өфө ҡалаһы янында Ағиҙелгә ҡойған Өфө йылғаһына үтеп китә. Ҡыш көндәрен Табын казактары өсөн күлдәр иң яҡшы балыҡ тотоу урыны булып тора, уларҙың икеһе Табын ҡалаһынығы булып, ҡаланан ете саҡрымдар тирәһендә Ағиҙел йылғаһының туғайлы яғында урынлашҡан. Уларҙың Аҡкүл тип аталғаны бик тәрән һәм балыҡлы; ҡорман, суртан, сабаҡ һәм табан балыҡтарының күп булыуынан башҡа үҙенең ҙурлығы менән дә билдәле: оҙонлоғо һигеҙ саҡрымға етһә, киңлеге урыны менән бер саҡрымдан да ашып китә. Тәүгеһенән ярты саҡрым алыҫлыҡта ятҡаны Күккүл исеме менән билдәле, ул әйләнәһенә саҡрымдан ашыу булмаған ерҙе биләп ята. Был ике күл ер аҫтынан бер-береһе менән тоташҡан икән, тип һөйләйҙәр.

Табын ҡалаһы бар яҡтан да төрлө йыртҡыстарға төйәк булған урманлы тауҙар менән уратып алынһа ла, уларға һунар итеү ҡала кешеләрен артыҡ ҡыҙыҡһындырмай. Был яҡын-тирәләге башҡорттар шөғөлө булып ҡала, ә улар, дала халыҡтарына хас булғанса, йәнлек аулауға бик әүәҫ. Ошо йәһәттән улар әлләниндәй хәйлә ҡороп тормай, тик үҙҙәренең етеҙлегенә һәм уҡ атыу маһирлығына таяна. Ҡыш етер-етмәҫтән уҡ, йәғни беренсе ҡырпаҡ ҡар яуыу менән йәш башҡорт егеттәре, йорттарын ҡалдырып, үҙҙәренең йыраҡ биләмәләрендәге урмандарға сығып китә. Улар төрлө төркөмдәргә (артелдәргә) бүленә, туған-тыумасаһы менән тейен, осар тейен кеүек ваҡ йәнлектәр аулай. Тауҙарҙа аҙ булмаған болан, мышы кеүек ҙурыраҡ хайуандар осраһа, ҙур төркөмдәргә тупланып, ҡайһы саҡта аҙна буйына бер боланды ҡыуып йөрөйҙәр; тоткан йәнлекте бер тигеҙ итеп бүләләр, йыш ҡына һәр ҡайһыһына бәләкәй генә ит киҫәге эләгә. Бындай табыштың әһәмиәтһеҙ, бәлки, кемдер өсөн көлкөлө булып та тойолоуы бар, сөнки йәнлекте оҙаҡ баҫтырып йөрөп, йыш ҡына үҙҙәренең аттарын яндырған осраҡтары була: әммә уларҙы бер ҡуян өсөн аҡсаһын да, хатта һаулығын да йәлләмәгән билдәле бай сифатында ҡарарға көнәш итер инем. Йәнлек аулауҙың, йәғни башҡорт һунарының иң мөһиме ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ - **Ред. иҫк.**) далаһында башҡарыла, улар унда Ырымбур губерна идараһы рөхсәтен алып, ҙур төркөмдәр менән бара; ул саҡта йыш ҡына башҡа ваҡ-төйәк менән бергә үҙҙәре менән менгегә өйрәтелгән тарпандарҙы көтөүе менән ҡыуып алып ҡайталар.

**(Дауамы бар).**

✓ *Уйлап ҡараһаң, бөгөн "Башҡорт әбейҙәре иттифағы" бар, "Башҡорт йәштәре иттифағы" - юҡ. Ниңә ағинәйҙәр үҙҙәренең алдына маҡсат ҡуйып, берләшә ала, ә йәштәр берләшә алмай?*



# БЕР ФЕКЕРГӘ

## ҡара-ҡаршы ултырып

**Башҡорт йәштәре араһында, йәмәғәт ойошмаларына тупланып, халҡыбыҙ, республикабыҙ өсөн файҙалы эштәр атҡарырға теләгәндәр бөгөн дә бик күп. Тик улар ҡайһы саҡта дөрөҫ юл таба алмай ҡаңғырып та киткеләй кеүек. Берәүҙәр мәсьәләләрҙе дәғүәләр ярҙамында хәл итеүҙе алға һөрһә, икенселәр үҙ-ара һөйләшеп аңлашыуҙар юлын һайлай. Бөгөнгө әңгәмәбеҙҙә ҡатнашыусылар алдына башҡорт йәштәре йәмәғәт ойошмалары эшмәкәрлеге йүнәлештәрен билдәләп ҡарауҙы маҡсат итеп ҡуйҙыҡ. Әңгәмәселәребеҙ - БР Мәҙәниәт министрлығының Мәҙәни ҡомартҡылар күсемһеҙ объектарын һаҡлау һәм файҙаланыу ғилми-производство үҙәге директоры, 90-сы йылдарҙа башҡорт йәштәре хәрәкәтенең әүҙем ағзаһы булған Данир Әхмәҙи улы ҒӘЙНУЛЛИН һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы эргәһендәге Йәштәр советы рәйесе Рәмзил Рәмил улы БАЙНАЗАРОВ.**

**▸ 27 октябрҙә Өфөлә үткән "Йәштәр - башҡорт халҡының стратегик ресурсы" тип исемләнгән форумда башҡорт йәштәрен бергә туплау маҡсаты ҡуйылды. Белеүебеҙсә, был маҡсатты атҡарыу бик үк еңелдән түгел, буғай...**

**Рәмзил Байназаров:** Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы эргәһендәге Йәштәр советына Өфөләге, республикалағы төрлө йәштәр ойошмалары инә. Белорет ҡалаһынан - "Ирек", Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһынан - "Салауат", Өфөнән - "Башҡорт", "Башҡортостан киләсәге", Башҡорт асыҡ КВН Лигаһы, Башҡорт йәштәре иттифағы кеүек ойошмалар Ҡоролтай янындағы Йәштәр советының нигеҙен тәшкил итә лә инде. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, әлеге мәлдә тарҡаулыҡ осоро кисергән ойошмаларҙы бергә туплап, бер төптән эшләргә хыялланабыҙ. Әлбиттә, ауырлыҡтар ҙа бар. Һәр берлектең рәйесе үҙенсә амбициялы, фекерҙәре лә үҙенсә. Бер яҡтан, был яҡшы ла, шул уҡ ваҡытта насар яғы ла бар. Нимәһе насар? Йәштәр ойошмаһы артабан ниндәйерәк булырға тейеш, тигән һорауҙа әлегә бер фекергә килмәгәнбеҙ. Кемдер: "Беҙ бөгөн артыҡ бер нәмә лә эшләй алмайбыҙ, шуға пикеттар ғына ойошторорға тейешбеҙ", - тип бара. Кемдер был фекергә ҡаршы төшә. Минең уйымса, пикеттар ҙа кәрәк, кәңәшмәләр ҙә. Әммә ун кешенән торған митингылар үткәреүҙән халыҡҡа ни файҙа? Яңыраҡ, Республика көнөндә, бер төркөм йәштәр йыйылған, тиҙәр. Ул пикетта күпме кеше ҡатнашҡан, тиһәгеҙ, әйтәйем: 25-ләп кенә.

**Данир Ғәйнуллин:** Ундай митингыларҙың, пикеттарҙың файҙаһынан зыяны күберәк. Рәмзил йәштәр ойошмаларының күп булыуын билдәләне. Уның яҡшы яғы нимәлә? Фекер төрлөлөгөндә. Насар яғы - көслө, үҙ артынан башҡаларҙы эйәртә алырлыҡ лидер булмаһа, ун ата балаһын бер идеологияға, фекергә килтереүе ауыр булыуында. Тарихты ҡараһаҡ, 90-сы йылдарҙа беҙ Башҡорт йәштәре иттифағын ойошторғанда, бер йәштәр ойошмаһы ла юҡ ине. Бушлыҡ ине. Беҙ бөтә республиканы бер Башҡорт йәштәре иттифағы байрағы аҫтына йыя алдыҡ. Һәр районда, һәр ҡалала уның филиалдары барлыҡҡа килде. Ойошмаға бер рәйес, бер идара һайланды. Бер фекерҙән сығыш яһаныҡ. Башҡорт йәштәре иттифағы "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге һымаҡ оло ойошмаларҙың терәге булды. Шул ваҡытта уҡ ойошмалар күп булһа, был үҙ-ара ыҙғышҡа килтерер ине. Беҙ быны ул ваҡытта Татарстан миҫалында күрҙек: унда Татар йәштәре берлеге менән параллель рәүештә бер нисә йәштәр ойошмаһы барлыҡҡа килде лә, үҙ-ара ыҙғышып, даирәләрҙе бүлешә алмай, бер платформаға инә алмай, беҙҙең күҙ алдында тарҡалыуға дусар булды. Әлеге көндә лә, иң идеаль осраҡтан сығып ҡарағанда, йәштәрҙең бер ойошмаға тупланыуы идеологик яҡтан яҡшыраҡтыр, тип уйлайым. Рәмзил дөрөҫ әйтә, һәр ойошманың үҙ идеологияһы, ҡарашы - уларҙы берләштереү ҡыйын. Ләкин бөгөн быны ыңғай яғы бар - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы эргәһендәге Йәштәр советына йыйылғандар икән, уртаҡ фекергә килеп, бергә барырға тейештәр.



Митингылар, пикеттар тураһында әйтелде. Мин үҙем тарих факультетында уҡыған студент инем ул саҡта. Башҡорт йәштәре иттифағын ойошторғанда ниндәй идеология менән сығыш яһаныҡ? Ул ваҡытта коммунистар партияһының, комсомолдың көслө өлгөләре бар ине. Беҙ ойошма эшләп китһен өсөн нимә кәрәк икәнен белдек. Тәү сиратта, матбуғат баҫмаһы, районда рҙа, ҡалаларҙа беренсел ойошмалар, көслө идеологик база булдырыу зарур ине. Иң тәүҙә һигеҙ кеше йыйылып, үҙебеҙҙе Башҡорт йәштәре иттифағы ағзалары итеп иғлан иттек, икенсе аҙымыбыҙ "Оран" гәзитен булдырыуға арналды. Бөгөнгө күп ойошмаларҙың хатаһы нимәлә? Айына бер тапҡыр сығып килгән баҫма йәки электрон гәзит булмаһа, халыҡты үҙенең эштәре менән таныштырмаһа, ул ойошманың киләсәге юҡ. Уны хатта сайт форматы ғына ла ҡотҡара алмай. Ойошманың платформаһын, бөгөнгө маҡсаттарҙы, башҡарылған эштәрҙе сағылдырып барған электрон гәзит мотлаҡ булырға тейеш. Бөгөнгө башҡорт ойошмалары тик Өфөлә студенттар араһында ғына ҡайнаша. Улар райондарға сыҡмай, филиалдары юҡ. Социаль базағыҙ булмайынса, һеҙҙең менән бер кем дә иҫәпләшмәйәсәк. "Өфөлә 10-15 кеше йыйыла, кемдәр һуң улар?" тип кенә ҡараясаҡтар. Ойошманың структураһы булһа, ул йәшәй. Структураһы төҙөлөп етмәһә, сүмесбаш һымаҡ килә лә сыға. Башы бар, йөҙөргә ҡойороғо ла, йөҙгөстәре лә юҡ. Сүмесбаш бик килбәтһеҙ йөҙә. Беҙҙең әлеге йәштәр ойошмалары ана шул сүмесбаш рәүешендәрәк.

**Рәмзил Байназаров:** Килешәм. Бер лидер һәм бер идеология юҡ бит. Бөгөнгө башҡорт йәштәре ойошмалары, улар ниндәй йүнәлештә эшләмәһен, барыбер Башҡорт йәштәре иттифағы нигеҙендә төҙөлгән. Йәштәр быны аңлай. Тик Башҡорт йәштәре иттифағы башлаған эштәрҙе тейешенсә дауам итерлек хәлдә түгел. Идеология аҡһай. Күптәр идеологияны барлыҡҡа килтерергә тырыша ла ул, ләкин башҡаларҙың "Беҙҙең идеология дөрөҫөрәк", тигән дәғүәһе арҡаһында эште аҙағынаса еткерә алмай. Ниндәй генә тарҡаулыҡ булһа ла, беҙ бөгөн эште дауам итергә бурыслыбыҙ. Әйҙә, һәр ойошма үҙ ҡаҙанында ҡайнаһын әлегә. Ошонан һуң берәй лидер өлгөрөп етер, бәлки, тип өмөт итәм. "Бер нәмә лә килеп сыҡмай ул барыбер, мине йәштәр аңламай", - тип, эште ташлап ҡуйһаң, был да дөрөҫ түгел. Был хыянат буласаҡ. Бәлки, яңылыш эшләйбеҙҙер. Шулай ҙа тәгәрмәсте артабан тәгәрәтергә кәрәк.

Данир ағайҙың тәҡдимдәрен тулыһынса хуплайым. 2010 йылда Бөтөн донъя башҡорттарының 3-сө ҡоролтайы ваҡытында, Йәштәр советы эшләй, тип билдәләнде, филиалдар асыу зарурлығы тураһында ла әйтелде... Ләкин ғәмәлдә нисек килеп сыҡты? "Өҫтән ҡушыу" арҡаһында район хакимиәттәренең йәштәр комитетын етәкләүселәр йәштәр советы рәйестәре итеп тәғәйенләнде. Ҡағыҙҙа - бар, эштә - юҡ килеп сыҡты. Данир Әхмәҙи улы юҡҡа ғына әйтмәне, бөгөн беҙгә райондарға сығырға кәрәк.

**Данир Ғәйнуллин:** Эйе, егеттәргә үҙҙәренә райондар буйлап йөрөп сығырға, инициативалы, рухлы егеттәрҙе табып, етәкселәр итеп ҡуйыуға булышлыҡ итергә кәрәк, тип уйлайым. Сөнки ауылда ла, ҡалала ла проблемалар уртаҡ. Йәштәрҙең матди хәле, уларҙың уҡыуы, эскелеккә ҡаршы көрәшеүе һымаҡ бөгөнгө йәштәрҙе босоған лозунгылар Өфө йәштәренең дә лозунгыһы. Ленин "Оҫҡондан ялҡын ҡабына" тигән бит. Башҡорт йәштәре иттифағының һәр оҫҡононан бер ялҡын барлыҡҡа килде. Башҡорт йәштәре иттифағы заманында "Отҡорҙар һәм зирәктәр клубы" ойошторғайны, шунан "Башҡорт асыҡ КВН лигаһы" хәрәкәте ҡалҡып сыҡты. "Һылыуҡай" конкурсынан донъя кимәлендәге башҡорт һылыуҙары студияһы - "Һомай" ойошторолдо. Спортта ла шул уҡ хәл. Силәбе, Свердловск, Ырымбур өлкәләрендәге Башҡорт йәштәре иттифаҡтары ла - һүнмәй ҡалған оҫҡондар улар. Был яҡтан миңә Гөлфиә апай Янбаеваның позицияһы оҡшай. Ул республика буйлап үҙенә күрә "Башҡорт әбейҙәре иттифағы"н ойоштороп йөрөй. Ул һәр районға бара, ағинәйҙәр ҡоро ойоштора, уның советтарын төҙөй. Ауылдарҙы, экологияны һаҡлаусы, йолаларыбыҙҙы тергеҙеүсе, халҡыбыҙҙың тәрбиә мәктәбен аяҡҡа баҫтырыусы шул хәтлем көслө структураға әйләнде ул хәҙер. Уйлап ҡараһаң, бөгөн "Башҡорт әбейҙәре иттифағы" бар, "Башҡорт йәштәре иттифағы" - юҡ. Ниңә ағинәйҙәр үҙҙәренең алдына маҡсат ҡуйып, берләшә ала, ә йәштәр берләшә алмай?

**Рәмзил Байназаров:** Быға тиклем әйткәнсә, әлегә йәштәрҙең көслө лидеры юҡ, тәжрибә лә самалы. Икенсенән, халыҡ араһына сығыу мөм-

*Митингыларҙың, пикеттарҙың файҙаһынан зыяны күберәк. Рәмзил йәштәр ойошмаларының күп булыуын билдәләне. Уның яҡшы яғы нимәлә? Фекер төрлөләгәндә. Насар яғы - көслө, үҙ артынан башҡаларҙы эйәртә алырлыҡ лидер булмаһа, ун ата балаһын бер идеологияға, фекергә килтереүе ауыр булыуында. Тарихты ҡараһаҡ, 90-сы йылдарҙа беҙ Башҡорт йәштәре иттифағын ойошторғанда, бер йәштәр ойошмаһы ла юҡ ине. Бушлыҡ ине. Беҙ бөтә республиканы бер Башҡорт йәштәре иттифағы байрағы аҫтына йыя алдыҡ. Һәр районда, һәр ҡалала уның филиалдары барлыҡҡа килде. Ойошмаға бер рәйес, бер идара һайланды. Бер фекерҙән сығыш яһаныҡ. Башҡорт йәштәре иттифағы "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге һымаҡ оло ойошмаларҙың терәге булды.*

✓ *Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө башҡорт йәштәренең бер генә сараһы ла дәүләт тарафынан финансланмай. Ә элекке йылдарҙа үткәргән саралар, киреһенсә, йәштәр комитеттары ярҙамында үтә ине.*



кинлектәребеҙ ҙә сикләнгән. Йәштәр советын яңынан тергеҙгәс, беҙ ҙә райондарға сыға башланыҡ ул. Быйыл Әбйәлил, Баймаҡ райондарында, Ырымбурҙа урындағы советтарҙы ойошторҙоҡ. Әүҙем егеттәр бар, эшләргә теләгәндәре беҙҙе үҙҙәре тапты, эшкә барымы булмағандар үҙҙәре китте. Ҡалған райондарға ла йөрөргә кәрәк, әлбиттә. Йәштәр ойошмаларының күп булыуы беҙҙең күҙгә күренмәгән "дошман"дарға ҡулайлы. Улар ойошмаларҙы бер-береһенә ҡаршы һөсләтеүгә лә күп һорап тормай. Шундай күренештәр ҙә бар шул...

**Данир Ғәйнуллин:** Һеҙҙең бөгөнгө хәлегеҙ, Рәмзил, 90-сы йылдар башында беҙҙең беренсе аҙымдар эшләгән сағыбыҙҙы хәтерләтә. Йәштәр киренән беҙҙең хәлгә ҡайтты. Минеңсә, бында юғалып ҡалырға ярамай. Лениндың бернисә томлығын уҡып сығырға ла, шул юл менән ойошманың лыуы мотлаҡ. Йәмәғәт ойошмаларына тупланған йәштәр бит публика сәйәсмәндәре булырға ынтыла. Әгәр һин үҙеңдең уй-фекерҙәреңде кешенең күҙенә тура ҡарап әйтә алмайһың икән, сәйәсмән була алмайһың. Мин Башҡорт йәштәре иттифағына килер алдынан трибунанан һүҙ ҙә әйтә алмай инем. Ринат Байымов менән Артур Иҙелбаевтарҙың телдәре-телгә йоҡмай ине. Сөнки улар ҡалала үҫкән, рус телен яҡшы беләләр. Шунан яйлап, үҙ-ара аралашып, бәхәсләшеп, халыҡ araһында йөрөп, райондарға сығып, үҙемде тоторға, сығыштар яһарға өйрәндем. Шундай дәрәжәгә еттек: беҙҙең бер һыҙғырыуыбыҙ була - меңәр, ике меңәр кеше митингыларға йыйыла торғайны. Хәҙер инде мин йәштәр менән бик аралашмайым, Рәмзил уларҙы күберәк беләләр...

**Рәмзил Байназаров:** Эйе, диспут клубтарын төрлө форрайҙар. Мәғлүмәт заманында йәшәйбеҙ ҙә бит, ләкин күптәр ниндәй мәғлүмәт сығанағына ышанырға белмәй...

**Данир Ғәйнуллин:** Беҙҙең йәштәребеҙгә пикеттар түгел, ә бик күп мәҙәни, спорт саралары уҙғарыу фарыз. Беҙ теге замандарҙа иң тәүҙә "Йәшлек-шоу" фестивален ойоштора башланыҡ. Унан "Һылыуҡай" конкурсын, "Урал моңо" фестивален, йәштәр көндәре, йәштәр һабантуйҙары ойошторҙоҡ. Ул сараларға йәштәр ағылып килде. Йәштәр позитив халыҡ, улар яҡшыны тиҙ күрә, тиҙ аңлай. Бөгөн урамда 100 кешенән пикет ойоштороп тороуҙың файҙаһы юҡ. Элек ҡайһы бер ойошмалар, бөгөнгө беҙҙең ойошмалар кеүек, 5-10 кеше менән пикетҡа сығып, әҙәм көлдөрөп тора торғайнылар. Хәҙер беҙҙең ойошмалар шул көнгә төштө. Әгәр халыҡты үҙ хәҡиҡәтегеҙгә инандыра алмайһығыҙ икән, ул юлдан баш тартһендерергә кәрәк түгелме икән?

**Данир Ғәйнуллин:** Йәш саҡта минең кабинетта Джон Кеннеди әйткән: "Не думай что может тебе дать нация. Думай, что ты можешь дать нации",- тигән лозунг эленеп тора торғайны. Был ҡанатлы һүҙҙәрҙе бына шулай күптәр күсереп алып, артабан таратты. Бындағы "милләт" тигән һүҙҙе "дәүләт" һүҙе менән алыштырырға ла була. Шул сағында, дәүләт органдары менән дә, Ҡоролтайҙағы оло ағайҙар менән дә, бүтән милли ойошмалар менән бергә эшләү еңелерәк буласаҡ.

**Рәмзил Байназаров:** Эйе, был ҡанатлы һүҙҙәр бөгөн дә актуаль. Беҙ бит йыш ҡына кемдәндер ярҙам өмөт итеп, кемдәндер хуплау һүҙе көтөп, идея көтөп ҡул ҡаушырып ултырабыҙ... Аҡса бирмәйҙәр, тип һуҡранабыҙ... Көтөргә түгел, ә халыҡ өсөн тип тырышып эшләргә кәрәк. Халҡыңаҙы уларҙың планына индереп, раҫлатып, финанс ярҙамы алыу мөмкинлеген дә файҙаланып өйрәнергә кәрәк. Йәмәғәт ойошмалары бит дәүләт органдары эшенә ярҙам итергә, үҙҙәренә лә ярҙам алырға тейеш. Был хаҡта һуңғы ваҡытта ил Президенты Владимир Путин да туҡтауһыҙ ҡабатлай, йәмәғәт институттары эшен тергеҙеп, уларға таянырға саҡыра. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө башҡорт йәштәренең бер генә сараһы ла дәүләт тарафынан финансланмай. Ә элекке йылдарҙа үткәргән саралар, киреһенсә, йәштәр комитеттары ярҙамында үтә ине. Ни өсөн тигәндә, дәүләт органдары менән уртаҡ фекергә килә алған лидерҙарыбыҙ бар ине. Ә бөгөн беҙҙең йәштәребеҙ урамда плакат тотоп тороуҙы хуп күрә. Ә эштәр эшләнмәй. Плакат тотоп тороу - сараһыҙлыҡ күрһәткесе. Бөгөн һәр нәмәне уртаҡ фекергә килеп, һөйләшеп эш-

# КИЛЕҮ ӨСӨН...

## һөйләшеү кәрәк

эшен алып китергә кәрәк. Ленин бик шәп пиарсы булған. Беҙҙең халыҡ ташҡа баҫылғанға ышана. Бөтөн донъя башҡорттарының бөгөнгө иң ҙур хатаһы - үҙенең матбуғат органы булмауы. Һин интернетта нимә яҙһаң да, ул күрше әбейҙән ишеткән ләстит булып ҡала. Ташҡа баҫылған икән - дөрөҫ тип ҡабул ителә. Гәзиттә "һинең күршең ҡара тәнле", тип яҙылған икән, һин күршеңдең аҡ икәнлеген күрһәң дә, гәзиттә яҙылғандан сығып шуға ышанаһың. "Ҡара тәнлеләргә берәй туғанлығы барҙыр ул", тип уйлай башлайһың...

Кешеләр бер фекергә килһен өсөн уларҙың йышыраҡ бергә осрашыуы кәрәк. Беҙҙең йәштәр иттифағы идеологияһы "Аҡ тирмә" клубында оло ағайҙарҙың хәбәрҙәрен тыңлағандан һуң формалашты. Йәштәргә фекер алышыу өсөн ниндәйҙер сәйәси бәхәстәр клубы ойоштороу кәрәк. Шунда ғына йәштәр бер-береһен аңлап, берләшә. Һәр дуҫлыҡ аралашыуҙан, бәхәсләшеүҙән башлана. Элекке Башҡорт йәштәре иттифағы лидерҙары - беҙҙең менән бәхәсләшеп, беҙгә ҡаршы булып, уртаҡ фекергә килеп, беҙҙең майҙанға күскән кешеләр. Бында ла фекер айырымлығын аҙайтыр өсөн йәштәр аралашырға тейеш.

**Социаль селтәрҙәрҙәге төркөмдәр әлеге арашалыу төрө була алмаймы?**

**Данир Ғәйнуллин:** Юҡ, сөнки күҙмә-күҙ аралашыуҙар бумала эшләргә булыр ине. Ләкин нимәһе бар: күп йәштәр ойошмалары етәкселәре беҙҙең Йәштәр советын үҙенең шәхси ҡоралы итеп күрергә теләй. Бәхәсләшә башлаһаң, дәғүәне шәхси дәғүә итеп ҡабул итәләр. "Һин шулай иткәнһең, былай иткәнһең", - тип, ҡыҙыша башлайҙар. Беҙ бит халыҡ мәнфәғәттәрен яҡлар өсөн берләшәбеҙ. Шуны аңлатыуы бик ауыр.

**Данир Ғәйнуллин:** Һеҙ ойошмаларҙың етәкселәрен генә сатыу хәйерлерәк. Халыҡты матур мәҙәни сараларға йәлеп итергә, позитивлыҡ менән алдырырға кәрәк. Хәҙер заманаһы ла шулай. "Һинең иптәштәрең көнө-төнө эсә, ер һөрөлмәй, бөтөн хоҡуҡтарыбыҙҙы бөтөрәләр", - тип тылҡыу йәштәрҙе ныҡ албырғата. Киреһенсә, кешене яҡшы өлгөләр ярҙамында тәрбиәләү фарыз. Бына бит, матур фестивалдәр, концерттар, бүтән саралар ойоштора алабыҙ. Кешеләр әҙәмсә ял итә ала. Эшҡыуарлыҡҡа йәлеп итеү буйынса ла эштәр алып барырға кәрәк. Эшҡыуар егеттәрҙе



***Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, әлеге мәлдә тарҡаулыҡ осоро кисергән ойошмаларҙы бергә туплап, бер төптән эшләргә хыялланабыҙ. Әлбиттә, ауырлыҡтар ҙа бар. Һәр берлектең рәйесе үҙенсә амбициялы, фекерҙәре лә үҙенсә. Бер яҡтан, был яҡшы ла, шул уҡ ваҡытта насар яғы ла бар. Нимәһе насар? Йәштәр ойошмаһы артабан ниндәйерәк булырға тейеш, тигән һорауҙа әлегә бер фекергә килмәгәнбеҙ. Кемдер: "Беҙ бөгөн артыҡ бер нәмә лә эшләй алмайбыҙ, шуға пикеттар ғына ойошторорға тейешбеҙ", - тип бара. Кемдер был фекергә ҡаршы төшә. Минең уйымса, пикеттар ҙа кәрәк, кәңәшмәләр ҙә. Әммә ун кешенән торған митингылар үткәреүҙән халыҡҡа ни файҙа? Яңыраҡ, Республика көнөндә, бер төркөм йәштәр йыйылған, тиҙәр. Ул пикетта күпме кеше ҡатнашҡан, тиһәгеҙ, әйтәйем: 25-ләп кенә.***

ҡырмағыҙ ҡороғоҙға - ябай йәштәрҙе лә саҡырығыҙ. Изге ниәттәрегеҙҙе, фекерҙәрегеҙҙе күберәк йәштәргә еткерергә тырышығыҙ, шул саҡта сафтарығыҙ ҙа артасаҡ. Үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртҡандар, киреһенсә, ситләшәсәк. Беҙ былдай хәлдәрҙе күп күрҙек...

**Рәмзил Байназаров:** Ауылға ҡайтһаң, йыш ҡына уҡытыусылар ҙа: "Өфөлә нимәләр булып ята ул?" - тип, теге йәки был хәл тураһында беҙҙән һойыйып, уңышҡа өлгәшкән кешеләр менән түңәрәк өҫтәлдәр ойошторһаң, һөҙөмтәһе мотлаҡ буласаҡ.

**Бокс буйынса донъя чемпионы Хәбир Сөләймәнов беҙҙең гәзиткә биргән интервьюһында: "Һиңә халҡың нимә бирергә тейеш, тип баш ватма, үҙең халҡыңа нимә бирә алаһың - шул турала уйла", - тигән бик шәп фекер әйткәйне. Ошоно йәштәргә** бер ниндәй файҙа ла, матди ярҙам да өмөт итмәйенсә, эскерһеҙ хеҙмәт итергә өйрәнергә кәрәк. Бына шул инде ул фиҙаҡәрлек. Юғиһә, беҙ әҙергә - хәҙер, тип йәшәйбеҙ.

**Данир Ғәйнуллин:** Халҡыңа хеҙмәт итергә теләһәң, бер ниндәй ҡаршылыҡ юҡ. Тик беҙ дәүләт органдары менән дә эшләргә өйрәнергә тейешбеҙ. Мәҫәлән, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығына барып, үҙегеҙ үткәрәсәк саралартыларға кәрәк. Заманы шулай. Уйлап ҡараһаң, дипломаттар төрлө илдәргә йөрөп, фекер алыша, ә беҙ күрше ойошмаға инеп, ундағы хәлдәрҙе белергә йыбанабыҙ. Донъяла өҫтәл артында, сәй янында ултырып һөйләшеп килешеүҙән дә артығыраҡ, шәберәк ярашыу ысулы табылмаған. Һуғышып та, асыуланып та бер-береңә ярап булмай. Һәр һуғыш солох менән тамамлана, тиҙәр бит.

**Рәмзил Байназаров:** Әйткәндәрең уйландырырлыҡ, Данир ағай. Ысынлап та, беҙгә үткән быуындарҙың тәжрибәһен һанларға, ололарҙың кәңәштөңәшенә ҡолаҡ һалырға, һығымталар яһарға өйрәнергә кәрәк. Бер маҡсат менән янабыҙ икән, төрлөбөҙ төрлө яҡҡа тартырға түгел, ә ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшеп, бәхәсләшеп, уртаҡ фекергә килергә ваҡыт.

**Данир Ғәйнуллин:** Беҙ уникаль республикала йәшәйбеҙ: башҡорттар менән бергә йөҙҙән артыҡ милләт нисәмә йыл тыныслыҡта, дуҫлыҡта тормош көтә. Ошо дуҫлыҡтың һағында беҙ - башҡорт халҡы торорға тейешбеҙ. Сөнки бындағы тыныслыҡҡа иң беренсе беҙ яуаплыбыҙ. Беҙгә, аҫбаларға, икеләтә аңлы, икеләтә һаҡ булырға кәрәк. Күршегә бер ауыр һүҙ әйтер, интернетҡа бер ауыр һүҙ яҙыр алдынан икеләтә уйлау мөһим. Сөнки һинең һүҙең бүтән милләт халҡының һүҙе һымаҡ ҡабул ителмәйәсәк - ерҙең хужаһынығы итеп ҡабул ителәсәк. Республикала тыныслыҡтың гаранты беҙ - башҡорт халҡы.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Бейеү ҡуйыусылар юҡ тип әйтә алмайым - бар улар. Тик яңылыҡ эҙләүселәре, ниндәйҙер асыш яһарға теләүселәре һирәгерәк. Унан килеп, уларҙы яҡлаусылар, күтәрмәләүселәр юҡ кимәлендә.*



*ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ*



# ШАХМАТ УЙЫНЫНА...

## яҙыусылыҡтың бер ниндәй бәйләнеше юҡ

**Был юлы һорауҙарыбыҙҙы Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, яҙыусы һәм драматург Наил Әсҡәт улы Ғәйетбаевҡа төбәйбеҙ.**

**➔ Наил Әсҡәт улы, һеҙ әҙәбиәткә "Әлфиә" тигән повесығыҙ менән килдегеҙ. Уҡыусы ул әҫәрегеҙҙе һәм Әлфиәнең үҙен шул тиклем яратып ҡабул иткәйне. Унын артабанғы яҙмышы нисек булды икән? Шундай уҡ рухтағы, шундай уҡ романтикалағы "Әлфиә-2" әҫәрен көтә бит һеҙҙән уҡыусылар...**

- "Әлфиә"нең яҙмышы барса проза әҫәрҙәренеке кеүек. 1976 йылда "Ағиҙел"дә баҫылып, шау-шыу тыуҙырғандан һуң, 1981 йылда "Һары тәҙрәләр" китабымда донъя күрҙе һәм шуның менән минең өсөн онотолдо. Сәбәбе шунда: минең бөтәһе 22 китабым донъя күрҙе, әммә барыһы ла яңы әҫәрҙәрҙән тупланғанға күрә, береһенә лә "Әлфиә"не индерә алманым. Бына әле һайланма әҫәрҙәремдең I томы баҫылып сыҡты, әммә ул "тарихи пьесалар"ҙан тора, II томды комедияларҙан тупларға уйлайым. Прозаға, шул иҫәптән "Әлфиә"гә лә, сират барып етерме, белмәйем. Унан һуң, "Әлфиә" кеүек романтик повесть йәш саҡта ғына яҙылалыр ул. Хәҙерге мәлдә кешеләрҙе, шул иҫәптән мине лә борсоған проблемалар бик күп. Әлеге мәлдә әҫәрҙәремдә ошо хаҡта яҙырға тырышам.

**➔ Беҙ һеҙҙең оҫта шахматсы икәнегеҙҙе беләбеҙ. Бер нисә тапҡыр төрлө кимәлдә чемпион да булғанһығыҙ. Шахматсы булыуығыҙ һеҙгә драма әҫәрҙәре яҙырға йә Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе булыуҙа нисек ярҙам итә?**

- Шахмат уйыны менән яҙыусылыҡтың бер ниндәй бәйләнеше юҡ. Бер юлы күп таҡтала шахмат уйнау ҙа Яҙыусылар союзы рәйесе булырға ярҙам итмәй. Шахматта һәйбәт уйнау яҙышыу һәм ойоштороу эштәренә ҡамасаулай ғына. Мәҫәлән, "яҙыусы" тип аталған ике шәхесте - прозаик менән драматургты алайыҡ. Прозаик булыу пьеса ижад итергә ярҙам итәме, тигән һорауға "Юҡ" тип яуап бирергә тура килә. Һәм яҙыусы ни тиклем һәйбәт прозаик булһа, ошо һәләте уға драма әҫәре яҙырға ҡамасаулай ғына. Һәм яҡшы драматургҡа ла прозаға тотоноуы ауыр. Сөнки был ике жанр бер-береһенән ныҡ айырылған ике төрлө һүрәтләү сараһын талап итә. Бына шуға күрә лә, шахмат уйыны өсөн барлығы үҙ өлкәһендәге зирәклек кәрәк. Ә һәйбәт әҫәр яҙыу өсөн әҙәбиәт өлкәһендә оҫта булыу мотлаҡ, Яҙыусылар союзы рәйесенә ойоштороу эштәрен белеү талап ителә.

**➔ Ир менән ҡатын ғүмер буйына бер-береһенә һыуынмаһын өсөн нисек йәшәргә тейештәр, тип уйлайһығыҙ?**

- Йәш саҡтағы дөрләп янған мөхәббәт әкренләп бер-берендә хөрмәт итеүгә әүерелә. Ир менән ҡатынға иң мөһиме ана шул бер-береһенә ихтирамды күҙ ҡараһы кеүек һаҡларға кәрәк. Быныӊ өсөн бер ҡасан да бер-береңә насар һүҙ әйтергә ярамай. Сөнки әгәр ире ҡатынын йәмһеҙ һүҙ менән атаһа, ҡатыны иренә унан да хөртөрәге менән яуап ҡайтарасаҡ, артабан ире лә ҡатынына ҡарата тағы ҡурҡынысын табасаҡ. Шулай итеп, бер мәл улар бер-береһен иң әшәке һүҙҙәр менән атай башларға мөмкиндәр. Бында инде мөхәббәт кенә түгел, кешегә йылы мөнәсәбәт тә һүнәсәк. Ҡатын - ирен, ире ҡатынын хөрмәт иткән иштәр генә ғүмер буйы бер-береһен һөйөп йәшәй...

*ИЖАДХАНА*

# БЕҘҘЕҢ ИЖАДИ ҒАИЛӘБЕҘ...

## рухиәт һағында

**Эльвира Аҡназарова менән Фәйзулла Ғөбәйҙуллиндың исеме үҙҙәре эшләгән Сибай концерт-театр берекмәһендә һәм ҡала халҡы араһында ғына түгел, тотош республикаға таныштыр. Башҡортостандың атҡаҙанған артистары тигән маҡтаулы исем йөрөткән бейеүселәр булғандан ғына түгел, ә ябайлыҡтары, татыу һәм тырыш ғаилә булып йәшәүҙәре, тормошҡа айыҡ ҡарашлы, маҡсатлы һәм матур киләсәккә ынтылыштарынан да киләлер уларға булған ихтирам һәм һөйөү. Айсыуаҡ исемле улдары һәм Әмилә исемле ҡыҙҙары, ата-әсәһенән матур өлгө алып, уларҙан күрмәксе, бәләкәйҙән сәхнәгә тартылып, сәнғәт һөйөп, милли йырмоңдарыбыҙға, бейеүҙәребеҙгә ғашиҡ булып үҫеп киләләр... Әңгәмәселәрем менән яҡындан танышыуҙы уларҙы сәнғәткә илткән сәбәптәр һәм юлдарҙы барлауҙан башланыҡ.**

**Фәйзулла Ғөбәйҙуллин:** Баймаҡ районының Байыш ауылында ете балалы ишле ғаиләлә алтынсы бала булып донъяға килгәнмен. Әсәйемдең моңло йырҙарын тыңлап, кескәй сағымдан уларҙы күңелемә һеңдереп үҫтем. Башҡорт сәнғәтенә беренсе һөйөү орлоҡтары шул саҡтарҙа уҡ һалынғандыр, бәлки... Спорт менән иҫ белгәндән дуҫ булдым, мәктәп йылдарында төрлө спорт ярыштарында ҡатнашыу, йүгереү минең өсөн ғәҙәти күренеш ине. Шулай ҙа профессиональ сәнғәткә килеүем осраҡлы рәүештә булды шикелле: тыуған ауылымда туғыҙынсы синыфты тамамлағас, әллә ни икеләнмәй генә Күмертауға - физкультура техникумына юл тоттом. Ике туған Зөһрә апайым да улы Мораҙымды Стәрлетамаҡ мәҙәниәт-ағартыу техникумына алып барыу ниәте менән бергә юлға сыҡты. Юлда ул мине лә шул уҡ техникумға ҡоҙалай башланы: "Бергәләп уҡырһығыҙ, һинең һәләтең бар бит, әйҙә, көсөңдө һынап ҡара", йәнәһе. Оҙаҡ уйламай ғына ризалаштым да ҡуйҙым. Әллә яҙмыш менән, әллә яңылыш инде, имтихандарҙы уңышлы тапшырып, техникумдың "Театр һәм кино актеры" бүлегенә уҡырға инеп киттем. Йәш, дәртле саҡ, уҡыуҙан буш ваҡытымда ҡаланың бейеү театрында шөғөлләнергә лә өлгөрҙөм. Шулай итеп, студент йылдары ла артта ҡалды һәм мин үҙебеҙҙең Сибайҙа яңы ғына асылған филармонияға эшкә ҡайттым...

**Эльвира Аҡназарова:** Атайым Вәкил Яҡуп улы менән әсәйем Рәйсә Хашим ҡыҙы Баймаҡ районында танылыу яулаған бейеүселәр булһалар ҙа, ағайым менән апайымдан айырмалы рәүештә, мин күберәк йырларға яраттым. Әммә уҡытыусыларым барыбер мине бейеүгә йәлеп итергә тырыша ине. Хәтеремдә, беренсе синыфта уҡығанымда синыфташым Илһам менән икебеҙгә "Дуҫлыҡ" бейеүен һалдылар һәм беҙ, Темәстән Баймаҡҡа килеп, смотрҙа сығыш яһаныҡ. Бейеүебеҙ нисек килеп сыҡҡандыр, әммә бәләкәй генә ике сабыйҙың оло сәхнәлә күбәләктәй өйөрөлөүен тамашасылар бик йылы ҡабул итте һәм дәррәү алҡыштарға күмде. Илһамды минән ҙурыраҡ күрһәтеү өсөн ҡамсат бүрек эсенә ҡағыҙ тултырып кейҙергәндәре иҫемдә ҡалған. Артабан инде "Һыбайлы ҡыҙ", "Бишбармаҡ", "Бөрйән ҡыҙҙары" бейеүҙәре менән сәхнәгә сыҡтым. Бейеүгә тартылыуыма өләсәйем - РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Ҡунаҡбикә Тулыбаева ла этәргес булғандыр. Ул да Темәстә йәшәне... Әммә Темәс урта мәктәбен тамамлағас та әле сәнғәт юлынан китергә баҙнат итмәнем, дөрөҫөрәге, хыялым уҡытыусы булыу ине. Шуға ла документтарымды Башҡорт дәүләт университетының биология факультетына тапшырҙым. Тик бала саҡтан күңелемә һеңгән "бейеү сире" үҙенекен иткәндер инде, бында ла "Ирәндек" бейеү ансамблендә шөғөлләнеүемде дауам иттем. Дүртенсе курста уҡығанымда ансамблдең әҙерлек төркөмөнә етәкселек иттем, бер юлы Сибайға ҡайтып, "Сибай" бейеү ансамблендә шөғөлләнергә лә өлгөрә инем...

**▸ Ике бейеүсе бер-береһен нәҡ шул "Сибай" бейеү ансамблендә осратҡандыр инде, моғайын...**

**Фәйзулла Ғөбәйҙуллин:** Бер күреүҙән үк нисектер күңелемде яулап алды Эльвира. Ул саҡта филармониябыҙ "Төҙөүселәр клубы"нда өйҙәш кенә ине.

**Эльвира Аҡназарова:** "Ошо ҡыҙ барыбер минең кәләшем буласаҡ", - тип маҡтанып та йөрөгән әле ул Фәйзулла, аҙаҡ бергә эшләгәндәрҙән ишетеп кенә белдем...

**Фәйзулла Ғөбәйҙуллин:** Байтаҡ ҡына дуҫлашып йөрөгәс, өйләнешергә булдыҡ. Әммә эшебеҙҙә бер кем бер ни белмәне. Ҡәйенбикәм - бейеү ансамбле етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Гөлназ Аҡназарова, репетиция мәлендә беҙгә иҫкәрмә яһап, яңылыш ҡына "кейәү менән кәләш" тип ысҡындырғас ҡына белделәр... Туйҙан һуң наҙланышып ултырырға ла форсат бирмәнеләр - икенсе көнөнә үк башҡалар менән бергә Өфөгә концерт менән юлға сыҡтыҡ. Беҙҙең өсөн юбилейҙар, тыуған көндәр, байрамдар булманы тиерлек - һәр саҡ юлда йәки эштә, сәхнәләбеҙ...

**Эльвира Аҡназарова:** Ысынында, бер төптән ике сәнғәт кешеһенең бер ғаилә булып йәшәүе үҙ ауырлыҡтарын да тыуҙыра. Бигерәк тә балалар бәләкәй саҡта ауырға тура килә - оҙайлы гастролдәргә сыҡҡанда үҙең сәхнәлә булһаң да күңелең өйҙә, балалар янында ҡала.

**▸ Бейеү сәнғәтендә бай тәжрибә туплаған бейеүселәр булараҡ, һеҙҙең һөнәргә бәйле һорау биреп китһәм, урынлы булыр, моғайын. Бейеүҙәрҙең эстәлеге, уларҙың ҡуйылышы хаҡында нимәләр әйтә алаһығыҙ?**

**Эльвира Аҡназарова:** Актуаль һорау һәм уға бер ҡатлы ғына яуап бирреп тә булмайҙыр ул... Бейеү ҡуйыусылар юҡ тип әйтә алмайым - бар улар. Тик яңылыҡ эҙләүселәре, ниндәйҙер асыш яһарға теләүселәре һирәгерәк. Унан килеп, уларҙы яҡлаусылар, күтәрмәләүселәр юҡ кимәлендә.



**Фәйзулла Ғөбәйҙуллин:** Һүҙҙең дөрөҫө кәрәк: бөгөн барыбыҙ ҙа бер ҡаҙанда ҡайнайбыҙ, һәр кем үҙе өсөн генә йәшәргә тырыша, урыҫтар әйтмешләй, "каждый боится за свою шкуру". Нимә эшләйһең - заманы шулай! Кемгә нимә, нисек оҡшай, уңайлы һәм ҡулайлы - барыһы ла шулай булып ҡаласаҡ... Өс-дүрт минутлыҡ ҡына бер бейеүгә тотош тарихты һыйҙырыу бик ауыр, әлбиттә, шулай ҙа тырышһаң, барыһын да булдырырға һәм эшләргә мөмкин.

**▸ Быға ҡәҙәре Сибай филармонияһы айырым ойошма булараҡ эшләп килде. Хәҙер концерт-театр берекмәһе итеп үҙгәртелеп, бала-**

✓ *"Бары тик ҡурҡмаһындар. Улар күбеһенсә, әрмелә хеҙмәт итеп ҡайтыуҙан фәтүә юҡ, тиеүсе һалдаттарҙың һүҙен тыңлап, хеҙмәткә барыуҙан баш тарталар. Бер йыллыҡ хәрби күнекмәләрҙән ниңә файҙа булмаһын, ти?*

**лар театры менән бергә ҡушылды. Берләштереүҙең ыңғай һәм кире яҡтарын нимәлә күрәһегеҙ?**

**Фәйзулла Ғөбәйҙуллин:** Әлбиттә, тәү сиратта ике учреждение ла үҙаллы ойошма булараҡ эшләргә теләр ине. Әммә һуңғы йылдарҙа урын алған финанс көрсөктәре, шуға бәйле ҡыҫҡартыуҙар, оптималләштереү күренештәре сәнғәт өлкәһенә лә ҡағылмайынса үтмәне. Бәлки, киреһенсә, мәҙәниәт уларҙан нығыраҡ зыян күргәндер: күпме учреждениелар ябылды, күпме кеше эшһеҙ ҡалды... Ҡасандыр шаулап-гөрләп торған мәҙәниәт усаҡтары һүрелде, һүнде. Бөгөн бит халыҡ клубтарға, мәҙәни сараларға әллә ни йөрөмәй. Һәр кемдең - олоһоноң да, кесеһенең дә - белгәне телевизорҙан бөтмәҫ сериалдар ҡарау йәки сәғәттәр буйына компьютер алдында ултырыу. Рухиәтлек юғала, тимәк, кешеләрҙә күңел байлығы, халыҡсанлыҡ кәмей. Дөрөҫ, оло быуын вәкилдәре боронғоса концерт-тамашалар, спектаклдәр ҡарауҙы хуп күрә, әммә төп халыҡтың быға "ваҡыты юҡ"...

**Эльвира Аҡназарова:** Уҙған быуаттың беҙҙең филармония асылған 90-сы йылдарын ғына алып ҡарайыҡ - ниндәй генә концерт булмаһын, зал тамашасылар менән шығырым тулы булды! Ауылдарҙа ла беҙҙе, йәғни профессионал артистарҙы, ниндәйҙер күтәренкелек менән, шатланып ҡаршы ала торғайнылар. Ә һуңғы йылдарҙа сәнғәткә тамашасы һөйөүе, милли үҙаң кәмей төштө. Концерт залдары бик һирәк халыҡ менән тулы була, ә ауылдарҙа кешене клубтарға йыя алмайҙар. Был нимәнән киләлер - әйтеүе ауыр. Шулай ҙа сәнғәт эшмәкәрҙәренә еңел-елпе программалар менән мауығыуҙан арынып, ысын мәғәнәһендә халыҡсан, тамашасыларҙың күңеленә яҡын сценарийҙар төҙөү тураһында йышыраҡ уйланырға кәрәктер. Әҙме ни бөгөн көн ҡаҙағына һуғыр проблемалар! Әйтәйек, ауыл ерҙәрендәге эшһеҙлек, буйҙаҡтарҙың күплеге, ғаилә парҙары араһындағы йәмһеҙ күренештәр, эскелек һәм наркомания... Бына шуларҙы сағылдырырға ине сәхнәләрҙә һәм кешеләрҙә уларға ҡарата ытырғаныу, кире ҡараш тыуҙыраһы, һис юғы оялыу хистәрен уятырға ине...



**Фәйзулла Ғөбәйҙуллин:** Филармония менән балалар театрын берләштереүҙең ыңғай яҡтары ла юҡ түгел. Беренсе нәүбәттә, әлеге лә баяғы финанс яғынан отошло. Унан театр актерҙары менән филармония артистары теге йәки был сарала бер-береһен тулыландырып, өҫтәп-күтәрмәләп ебәрә ала. Күрше Татарстан Республикаһында был байтаҡтан килгән ғәҙәти күренеш. Нисек кенә булмаһын, беҙгә бергә эшләргә һәм йәшәргә, халыҡтың рухи ихтыяждарын бергәләп, берлектә ҡәнәғәтләндерергә. Бынаһы, миненсә, иң мөһиме!

**▸ Һуңғы йылдарҙа, сәхнә - йәштәр өсөн, тигән ҡараш өҫтөнлөк итә. Бының менән килешәһегеҙме?**

**Эльвира Аҡназарова:** Сәхнә - бөтә халыҡтыҡы! Милли мәҙәниәтебеҙгә, сәнғәткә битараф булған йәштәрҙән бар булмышы менән йыр-моңға, сәнғәт өлгөләренә бирелгән, халыҡ йолаларына, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙгә ғашиҡ әбей-бабайҙар ихтирам һәм хөрмәткә лайыҡ. Шул уҡ фольклорҙы ғына алып ҡарайыҡ: оло быуын халҡыбыҙҙың үткәне, мәҙәни хазиналары менән яҡынданыраҡ таныш, күп нәмәне улар үҙҙәре күргән һәм кисергән. Һөҙөмтәлә фольклорҙы сәхнәлә уларҙан да теүәлерәк һәм халыҡсаныраҡ сағылдыра алыусылар юҡтыр. Ишетеп, уҡып ҡына белгәндән үҙ күҙҙәрең менән күргән яҡшыраҡтыр, тип уйлайым. Ә йәштәр йәштәрсә инде - уларға заманса ритм хас: көйө лә, бейеүе лә еңел, күңелле булһын! Милли колорит, халыҡсанлыҡ, тарихилыҡ артҡы планда ҡала...

**Фәйзулла Ғөбәйҙуллин:** Эйе, сәнғәтебеҙҙә, ғөмүмән, йәшәйешебеҙҙә милли традициялар үҙгәрә, юғала - шунаһы йәл. Унан килеп, һуңғы осорҙа һөнәрмәндәр менән һәүәҫкәрҙәр араһын тигеҙләү күҙгә ташлана, ә кәрәкмәҫ ине. Сөнки нимә генә тип әйтмә, боронғоларса фекер йөрөтһәк, "уҡыған уҡыған инде"!

**▸ Былтырғы йыл Мәҙәниәт йылы тигән исем аҫтында үтте. Исемле йыл нимәләре менән хәтерегеҙгә һеңде?**

**Фәйзулла Ғөбәйҙуллин:** Беренсе сиратта, ниһайәт, финанс хәлебеҙ бер аҙ яҡшырҙы - мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын күтәрҙеләр, шуға ҡыуандыҡ. Әлбиттә, исемле йылда коллективыбыҙҙың сафы ярайһы ғына һирәгәйеүе күңелде ҡыра биреп ҡуйҙы ҡуйыуын, шулай ҙа дәрт-дарманлы йәштәрҙең эшкә килеүе, бөгөн уларҙың ҙур теләк менән ең һыҙғанып эшләп йөрөүе йыуаныс. Тимәк, киләсәккә лайыҡлы алмаш ҡаласаҡ, филармониябыҙ үҙ бәҫен юғалтмаясаҡ, тигән өмөт бар.

**Эльвира Аҡназарова:** Былтыр төрлө өлкәләргә гастролдәргә лә сыҡтыҡ һәм был йүнәлештә эш дауам итәсәк. Мәҫәлән, Санкт-Петербургта, Һарытауҙа, Свердловск өлкәһендә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе милли һабантуйҙар үткәрешеп ҡыуандырҙыҡ. Учалы филармонияһында эшләүсе коллегаларыбыҙ менән үҙ-ара йыр-моң, бейеү бәйгеләрендә ярышып, дуҫлыҡ күперҙәрен нығыттыҡ. Әйтергә кәрәк, ике ижади коллективтың бындай осрашыуҙары ике яҡ өсөн дә тик файҙаға ғына булды - бер-беребеҙҙән өйрәнер, тәжрибә уртаҡлашыр нәмәләр бихисап икән шул... Тамашасыларыбыҙҙың һөйөүен, ихлас алҡыштарын ҡаҙанған яңы программалар сығарҙыҡ. Әйткәндәй, "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" тип исемләнгән театрлаштырылған тамашабыҙ үҙебеҙҙә һәм күрше райондарҙа аншлаг менән үтте һәм ижади состав уны республикабыҙҙың Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Нефтекама, Ишембай кеүек эре ҡалаларына ла алып сыҡты.

**▸ Һеҙҙең булмышығыҙҙа илһөйәрлек, аҫабалыҡ, милли рух һыҙаттары ярылып ята. Ижадығыҙҙа ла был төшөнсәләр төп урынды биләй, шикелле... Балаларығыҙҙы ла шул рухта тәрбиәләйһегеҙҙер, моғайын?**

**Эльвира Аҡназарова:** Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән, тиҙәрме әле? Балаларыбыҙ ҙа беҙҙең үксәгә баҫып киләләр, рәхмәт төшкөрҙәр. 3-5 йәштәренән бейей башланылар. 2003 йылда үткән "Ирәндек моңдары"нда, 2006 йылда Туймазыла үткән "Оҙон көй"ҙә ҡатнашып, призлы урындарға лайыҡ булдылар. "Сулпылар" өлгөлө ансамбленә, сәнғәт мәктәбенең "Осҡон" бейеү ансамбленә йөрөүҙәре лә шул беҙҙең юлды ҡыуыуҙарынан киләләр, ахыры.

**Фәйзулла Ғөбәйҙуллин:** Балаларҙы сағыу кейемдәр менән халыҡ алдына - сәхнәгә сығыу, төрлө ерҙәргә барыу үҙенә тарталыр, тип уйлайым. Республика бәйгеләрендә ҡатнашып, маҡтау ҡағыҙҙарына, дипломдарға лайыҡ булыуҙары ла үҙенекен итәлер. Улыбыҙҙа ла, ҡыҙыбыҙҙа ла милли ғорурлыҡ төшөнсәләре тәрбиәләүҙе үҙебеҙҙең бурыс итеп һанайбыҙ инде һәм һәр ата-әсә был тәңгәлдә балаларына ғаиләлә үк аныҡ йүнәлеш бирергә тейештер.

**▸ Икегеҙҙең дә бейеүҙәрегеҙгә бейеү сәнғәтенең нескәлектәрен, асылын төптән тойомлау, һөнәри оҫталыҡ серҙәрен тулы кимәлдә асыуға ынтылыш хас. Мәҫәлән, "Ҡоҙасам", "Елән" "Мөхәббәт шишмәһе", "Дуҫлыҡ", "Бүләк" парлы бейеүҙәрегеҙҙе генә алайыҡ - уларҙа һеҙ бер бөтөндө хасил итәһегеҙ...**

**Фәйзулла Ғөбәйҙуллин:** Рәхмәт! Бейеүҙе тамашасылар хөкөмөнә сығарыр алдынан уны әҙерләү өсөн бик күп көс түгергә, хеҙмәт һалырға тура килә. Һәр бейеүҙең үҙ йөкмәткеһе, үҙ биҙәге бар. Тимәк, уны тейешле кимәлгә еткереү бейеү ҡуйыусының ғына түгел, ә бейеүҙе башҡарыусыларҙың да бурысы. Шулай икән, бейеүҙәргә өҫтән-мөҫтән ҡараш хилаф был йүнәлештә...

**Эльвира Аҡназарова:** Ысынлап та, ике бейеүсе бер-береһен яҡындан аңламай тороп, дөйөм уңышҡа өлгәшеү мөмкин түгел. Был йәһәттән икебеҙҙең бер ғаиләнән булыуыбыҙ тик беҙҙең файҙаға ғына - ғәҙәттәге репетицияларҙан тыш ваҡытта ла үҙ-ара кәңәшләшергә, бер-беребеҙҙе төҙәтергә мөмкин.

**Мотал РӘМОВ**
**әңгәмәләште.**

ИР-АЗАМАТ

# ӘРМЕ ХЕҘМӘТЕ СЫНЫҠТЫРА...

**Йәше еткәс, һәр һау-сәләмәт егеттең әрме хеҙмәтенә барыуын мотлаҡ ғәмәл итеп күреп өйрнгәнбеҙ. Сөнки хеҙмәттең бер йылға ҡалдырылыуына ҡарамаҫтан, һалдат тормошонан һуң егеттәр барыбер ҙә олпатланып, көс һәм тәжрибә туплап ҡайта. Шуға күрә, хәрби хеҙмәткә саҡырылыуҙан баш тартыу, унан ҡасыу - мәғәнәһеҙлек тип иҫәпләй мәҡәлә геройым Айҙар Шәмсетдинов.**





Был Йәнтеш егете әлеге мәлдә хәрби хеҙмәтенең аҙаҡҡы көндәрен үтәп, тыуған яғына юлланырға йөрөй. Айҙар Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлағандан һуң, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында эш башлай. Ләкин ең һыҙғанып эшкә тотонған йылдың көҙөндә уны әрмегә саҡыралар.

- Хәрби хеҙмәт мине күп нәмәгә өйрәтте, - тип һөйләне Айҙар скайп аша аралашыуыбыҙ мәлендә. - Хәҙер ҡайтырға бер нисә генә көн ҡалды. Һаман да дуҫтарым, яҡындарымдың мине перронда оҙатып ҡалғанын яҡшы хәтерләйем. Поезд ҡуҙғалып киткәс, теүәл бер йылға тыуған яҡтан, һөйгәнемдән, дуҫтарҙан айырылыуыма ышанмай бергилке бошоноп барҙым хеҙмәт итеү урынына, унда барып урынлашҡас, мине тағы ла күңелһеҙерәк уйҙар биләп алды. Көндән-көн һағыныу хисе артты - яратҡан эшем, коллегаларым хаҡында уйландым. Әммә әрме хистәрҙе лә сыныҡтыра икән ул. Мин унда ысын мәғәнәһендә һағынырға өйрәндем. Дөрөҫөн әйткәндә, әрмеләге хеҙмәтем менән мин ҡәнәғәтмен, әлдә килергә насип булған, тием. Холҡома яҡшы һыҙаттар өҫтәлгәндер, тип уйлайым. Бында һин йәйләп уйлауҙан, яй эш итеүҙән туҡтайһың, бөтә нәмәне тиҙ-тиҙ һәм оператив башҡарырға бурыслыһың...

Айҙар Абхазияның Гудаута ҡалаһында һауаға ҡаршы оборона (ПВО) ғәскәренең зенит-ракеталы дивизионында (ЗРДН) хеҙмәт итә. Уның фекеренсә, әрме егеттәрҙе физик яҡтан ғына түгел, ә рухи яҡтан да тәрбиәләй, сыныҡтыра. "Әрмегә барырға теләмәгән йәш егеттәргә нимә әйтергә теләр инең?" тигән һорауыма Айҙар: "Бары тик ҡурҡмаһындар. Улар күбеһенсә, әрмелә хеҙмәт итеп ҡайтыуҙан фәтүә юҡ, тиеүсе һалдаттарҙың һүҙен тыңлап, хеҙмәткә барыуҙан баш тарталар. Бер нәмә лә һөҙөмтәһеҙ булмай бит. Бер йыллыҡ хәрби күнекмәләрҙән ниңә файҙа булмаһын, ти? Рәсәй Федерацияһының хәрби комиссариаты яҡшы кимәлдә хеҙмәт итеү өсөн бөтә шарттарҙы ла булдырған. Бары тик теләк һәм ныҡышмаллыҡ кәрәк. Сынығыу тигән буҡаны мин әрмелә татығанмындыр, тим. Шулай уҡ әрме биргәнде һин өйөңдә ала алмаясаҡһың. Сөнки өйҙә һине яраталар, ашарға тәмле-татлыһын ғына әҙерләп бирәләр, ә бында һин үҙең өсөн тик үҙең генә яуап бирәһең, нимә бирәләр - шуны ашайһың, нимә талап итәләр - шуны башҡараһың", - тип яуапланы.

Ысынлап та, сынығыу мәктәбен лайыҡлы үткән ир-егеттәр уны үтмәгәндәрҙән айырылып тора. Һәр хәлдә, әрме - ул тәү сиратта Ватаның алдындағы изге бурысыңды үтәү!

**Айгизә АСҠАРОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ШӘКӘР УРЫНЫНА...

## крахмал

■ Гарвард университетында уҙғарылған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, офисты йыш елләтеп тороу хеҙмәткәрҙәрҙең когнитив функцияларына яҡшы йоғонто яһай. Белгестәр 6 көн буйына төрлө шарттарҙа эшләгән 24 кешене тикшергән. Һауа таҙа булған бинала эшләүселәр ҡуйылған бурыстарҙы 61 процентҡа тиҙерәк үтәгән. Әгәр ҙә бүлмәләрҙә һауаны бысратыусы матдәләр генә түгел, углекислый газ кимәле лә түбән икән, һынауҙа ҡатнашыусыларҙың мәғлүмәтте ҡабул итеү һәләте 101 процентҡа күтәрелгән. Әйткәндәй, Кардифф университеты ғалимдары мәғлүмәттәре буйынса, офистағы йәшеллек эшкә һәләтлелекте 15 процентҡа арттыра. Бынан тыш, бүлмә гөлдәре хеҙмәткәрҙәрҙең сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһай, улар үҙҙәрен күпкә бәхетлерәк тоя, имеш.

■ Шәкәр һаулыҡҡа ҙур зыян килтерә, тип иҫкәртә эксперттар. Яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, шәкәр матдәләр алышыныу процесын боҙа, ҡан баҫымын күтәрә, йөрәк сирҙәренә килтерә. Балалар эндокринологы Роберт Ластиг шәкәргә тотош бер китап арнаған. Уның һөйләүенсә, шәкәр ҡулланыуҙы кәметкән балаларҙың сәләмәтлеге күпкә яҡшырған. Уларға шәкәр урынына крахмал ҡушылған продуктлар тәҡдим иткәндәр. Яңы рациондың калориялығы артыҡ үҙгәрмәһә лә, 10 көн эсендә юғары ҡан баҫымы, артыҡ ауырлыҡ кеүек сирҙәрҙе еңергә мөмкинлек тыуған. Шәкәр күләме 28 проценттан 10 процентҡа, фруктоза 12 проценттан 4 процентҡа кәмегән. Калорияларҙы крахмал тулыландырған. 9 көндән матдәләр алышыу профилендә үҙгәрештәр күҙәтелгән - холестерин, шәкәр, инсулин түбәнәйгән, бауыр яҡшыраҡ эшләй башлаған.

■ Ғаиләлә килеп тыуған проблемаларҙы ирҙәр һәм ҡатындар төрлөсә кисерә. Ратгер университеты ғалимдары билдәләүенсә, былдай саҡта ҡатын-ҡыҙҙар борсола башлай һәм тормош иптәшенә ҡарата ышанысы һүрелә. Ир-егеттәр иһә быны тағы бер уңышһыҙлыҡ итеп кенә ҡабул итә. Күпселек ғаиләләрҙә йыш осраған проблемалар һәм кисерелгән тойғолар булып һағыш, хәүеф, өмөтһеҙлек тора. Ауырлыҡтарға ҡараштар ҙа айырыла. Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙ проблеманы һөйләгәндән үҙен еңелерәк тоя. Ир-егетте был, киреһенсә, асыуландыра ғына.

■ Бала тәрбиәләгәндә махсус журналдарҙы һатып алмау күпкә хәйерлерәк. Американың педиатрия академияһы ғалимдары асыҡлауынса, бындай йүнәлештә эшләгән журналдарҙа файҙалы мәҡәләләр менән реклама игландары ла бар. Уларҙың һәр 6-сыһы баланың ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуя, тип иҫәпләй ғалимдар. Мәҫәлән, күп кенә рекламалағы фотоларҙа балалар йөҙ түбән ятып йоҡлай, әммә педиатрҙар бәләкәй балалар салҡан ятып йоҡларға тейеш, ти. Был көтөлмәгән үлем синдромын түбәнәйтә. Ғалимдарҙы рекламаларҙың педиатрҙарҙың кәңәштәренә ҡаршы килеүе борсой.

■ Юғары интеллектҡа эйә ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятмай, ти Буффало университеты ғалимдары. Эксперимент ваҡытында 105 ҡатын-ҡыҙ менән ир-егет математика менән инглиз теленән тест эшләгән. Һуңынан көслө зат ҡатын-ҡыҙҙы баһалаған, быныӊ алдынан тест һөҙөмтәләре белдерелгән. Ир-егеттәр аҡыллы ҡатын-ҡыҙҙарға һоҡланыуын белдергән, әммә үҙ-ара аралаша башлағас та, уларға ҡыҙыҡһыныуын юғалтҡан. Улар был аҡыллы гүзәл заттар менән ҡабаттан осрашырға теләмәгән. Белгестәр быны ир-аттың аҡыллы ҡатын-ҡыҙ эргәһендә үҙенең көс-ҡеүәтен юғалтыуы менән аңлата.

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 7-се һабаҡ: "Ихтыяр көсө нимәгә тиң?"

"Үҙ кәйефе менән идара итә алған кеше генә эҙмышының хужаһы була ала" тигән бик тапҡыр әйтем бар. Беҙ барыбыҙ ҙа кәйеф ҡоло шул. Шул уҡ ваҡытта тик аҡыл менән генә лә йәшәп булмай, өлпөлдәп торған йөрәгебеҙ, ҡайнап торған хис-тойғоларыбыҙ бар. Көтмәгәндә әйтелгән ауыр һүҙҙән, күңелгә ятмаған насар мөнәсәбәттән, аңғармаҫтан һине үҙлегендән сығарған хәл-күренештәрҙән, бәлә-ҡазаларҙан беребеҙ ҙә азат түгел. Шуға ла тормошто йәшәү өсөн көрәш, тип әйтәләр.

Тап шундай мәлдәрҙә, кәйефтәр ҡырылған, күңелдәр кителгән саҡтарҙа үҙ кәйефтәрен еңә алмаусылар рюмкаға үрелә лә инде. Араҡы ҡан тамырҙарын киңәйтә, башҡа йүгерә, кеше мейеһен туктатыусы хафаларынан арындырып, үҙенсә ял иттерә. Шәпме? Шәп! Араҡыны, шарапты юҡҡа ғына уйлап сығармағандар бит. Үкенескә ҡаршы, ситтән ҡарап торғанда ғына шулай кеүек. Ләкин ошо урында "Әммә..." тигән ике күренеш, ике хәл бар. Шулар булмаһа, ҡайһылай яҡшы ла бит.

Беренсенән, күңел төшөнкөлөгөнән ошо юл менән сыҡтың да, ти. Әгәр ҙә был хәлең көн һайын ҡабатланһа? Һин башҡа осраҡтарҙа инде үҙеңдән-үҙең ошо анһат юлды ҡулланасаҡһың бит. Был бер аҙна һуҙымында дауам итһә? Тағы ла алдағы 280 көн буйы һин ошо уҡ допингтың ҡолона әйләнһәң? Хатта бер көндә, бер генә тапҡыр эселгән йөҙ грамдан һуң да 40 көн буйына шул хәлеңдән сыға алмайһың бит. Бында арифметика ябай: 9 көн буйына, көн һайын йөҙәр грамм генә эсһәң дә, һин тотош йыл буйы туктамай эскән кеше булып иҫәпләнәсәкһең. Ҡалған 356 көнөңдә "копкоро" үткәрһәң дә.

Икенсенән, һин кәйеф ҡоло һәм күңелеңде күтәрер өсөн ошо юлға барыуһың икән, йөҙ грамм менән генә сикләнмәйәсәкһең. Үҙлегеңдән сығарған хәлдә тыныс ҡына ҡабул итә һәм үткәрә белмәй, рюмкаға ынтылыуың үҙе уҡ шул турала һөйләй. Бындай саҡта тик йөҙ грамм менән генә мөрхәтһеңгән кешене күргәнем юҡ әле. Тәүге һәм артабанғы йөҙәр грамдарҙы ҡабул итеү технологияһы һәм психологияһы шулайыраҡ: тәүге рюмка - ул һорау, икенсеһе - яуабы, өсөнсөһө - раҫлаусыһы, артабанғылары - инҡар итеүсеrange... Аңлайышлыраҡ булһын өсөн һәр хәлгә айырым туҡталып үтәм.

Тәүге рюмканы ҡабул иткәндә, әйткәнемсә, кеше үҙен шул тиклем һәйбәт тойғандай хис итә. Башына ҡан йүгергәс: "Әле генә миңә ҡыйын ине, ниңә шулай ҡапыл рәхәт булды әле?" - тигән һорау уны тынғыһыҙлай башлай. Бәлки, ул шул йөҙ грамдан тукталып та ҡалыр ине, әммә үҙенә рәхәтлек тойғоһо бүләк иткән сәбәпте аңларға теләй. Һәр хәлдә, кеше тәбиғәте шулай ҡоролған. Тәүге рюмкаға яуап булып икенсе йөҙ грамм эйәрә лә инде. Һорау ҡәнәғәтләндерелгәс, кеше үҙен тәүге йөҙ грамды эсергә мәжбүр иткән күңел хәлен иҫенә төшөрә лә, кемгәлер был хаҡта һөйләп, эс бушатҡыһы килә башлай. Өсөнсө - раҫлаусы рюмка эселгәс, кешенең теле сиселә. Был саҡта күптәр һөйләү урынына йырлай башлай. Был да аңлашыла, эскә йыйылған хәсрәтте йыр ҙа бушата бит. Артабанғы дүртенсе, бишенсе, алтынсы һәм башҡа н-сы рюмкалар - бар нәмәне, туғандарын, дуҫтарын, таныштарын, хатта донъяны инҡар итеүсе йөҙәр грамдар.

Әммә "иң ҡыҙығы" иртәнсәк уянғас башлана. Кеше кисәгегә ҡарағанда ун-егерме тапҡырға тәрәнерәк күңел төшөнкөлөгөнә юлыға. Артабан тағы ла - "һорау - яуап - раҫлау - инҡар итеү". Тик был юлы инде мәғәнәһеҙ һорауҙар ҡуйыла, ауырыраҡ яуаптар бирелә, михнәтлерәк раҫлауҙар була, ғазаплыраҡ инҡар итеүҙәр башлана.

Шатлыҡ тойғоһо кисергәндә лә кеше ошо уҡ юлға барыусан. Әммә тәүге рюмканан башлап ҡыуанысың үҙенән-үҙе һағыш төҫө ала башлай. Аллаһы Тәғәлә бүләк иткән шатлыҡты Иблис ризығы менән арттырып булмай бит инде. Үҙеңең изге бүләгән шулай хәрәм менән буяғаның өсөн киләсәктә һиңә тағы ла шатлыҡ килтерерме икән Аллаһы Тәғәлә? Яҙмаларымындың "үтескә алынған шатлыҡ" (26 август) тигән бүлегендә мин был хаҡта әйтеп үткәйнем инде.

Әгәр ҙә ихтыяр көсөң булмаһа, һәр ынтылышың "тумыртҡа тәүбәһе" генә була инде. Тап ошо сифатҡа эйә булмағандар эсеүҙән ҡотолоу өсөн табиб ярҙамына таяна. Әммә тормош беҙҙән көслөрәк, башта һанап киткән хәлдәргә, кисерештәргә ҡалғанда, күптәр табибтан үҙенең тәненә тектергән ампулаһын алып ташлап булһа ла, тәүбәләрен, бирелгән анттарын онотоп, тағы ла эсә башлай. Был осраҡта оҙаҡ ваҡыт эсмәй йөрөүселәр бөтөнләй туктай алмай, эсмәй йөрөгән көндәрҙәге лимитын кире тулыландыра, артығы менән. Ҡайһы берҙәре хатта араҡыға яныптап үлә. Был хәл көн һайын эсеүгә ҡарағанда ла аяныслыраҡ. Шуның өсөн эсеүен ташлаған кеше был аҙымға "ғүмерлеккә" тип барырға тейештер, тип уйлайым.

Ихтыяр көсөнә килгәндә, атҡарып булмаҫлыҡ эш булмай, уны эшләй алмаған кешеләр генә була, тип яуап бирер инем мин. Сәбәп ҡылһа, ҡарап тороуға хатта иң ихтыярһыҙ булып күренгән кеше лә ҡорос ихтыярлыға әүерелә ала. Шешәбикә менән хушлашҡанға тиклем мин үҙемде, көслө ихтыярлы кеше инем, тип тә әйтә алмайым. Был сифаттарҙы мин үҙемдә айыҡ тормошта яһаған тәүге аҙымдарымдан уҡ тәрбиәләргә тотондом.

Ихтыяр көсө нимәгә тиң? Егеттәр менән үҙ-ара һөйләшкәндә мин быны уларға шаяртып түбәндәгесә аңлатам: "Күҙ алдына килтерегеҙ. Һеҙ аулаҡ ҡына йылы бүлмәлә шундайын сибәр, шундайын йәш, ҡалаҡҡа һалып йоторлоҡ ҡыҙ менән яңғыҙ ҡалғанһығыҙ. Тышта, яҡшы хужа хатта этен дә ҡыуып сығармаҫ, тигән шөкәтһеҙ һауа торошо. Бүлмәгә ягымлы музыка ағыла, яртылаш ҡараңғы, өҫтәл аш-һыуҙан һығылып тора. Иң мөһиме, ҡыҙ һине ярата, таңға тиклем бүлмәлә ҡалыуыңды теләй, етмәһә, әле генә танышҡан һылыуға үҙең дә битараф түгелһең. Барыр ереӊ булмаһа ла, ошо донъяны ташлап, ырашҡылы, һыуыҡ ҡараңғылыҡҡа олаға алаһығыҙмы? Эсеү ташлау ана шундай ихтыяр көсөнә тиң...".

Егеттәр йығылып ятып көлә. Ҡайһылары: "Мин ул бүлмәлә тороп ҡалыр инем. Араҡы эсмәһәм дә, ҡыҙҙы ҡосағыма алыр инем..." - тип тә ебәрә. Икенселәре: " Ундай мине яратҡан, үҙем яратҡан кешем булһа, эсеүемде ташлар инем..." - тип ҡуя. Бында икенселәрҙең яуабы ҡулай булһа кәрәк, сөнки ҡоро ышанысҡа һәм инаныуға таянып ҡына эсеүҙән ҡотолоп булмайҙыр. Һине аңлаған ныҡлы терәгең, яҡын дуҫың, яратҡан кешең булыуы мотлаҡ. Ундай кешем хаҡында мин алда әйтеп үткәйнем инде. Әлбиттә, мин бында шартлы рәүештә, ихтыяр көсөнөң үлсәү берәмеген билдәләү өсөн "аулаҡ бүлмәләге ҡыҙ" миҫалын килтерәм. Ә, ысынында иһә, араҡының, иҫереклектең ымһындырғыс көсө тап ана шундай. Ихтыяр көсөн нығытыуға килгәндә, был хаҡта алдараҡ һөйләшербеҙ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ИКЕ ТӘҠДИМ

Айыҡ тормош менән йәшәүемә байтаҡ булды. Шул арауыҡта ике фекер:

- "Айыҡ Башҡортостан" ойошмаһы егеттәре дөрөҫ әйтә: эскелеккә ҡаршы көрәштең һөҙөмтәһе аҙ, айыҡ тормош өсөн көрәшеү лазым.

- Эскелек - һөҙөмтә, сәбәп түгел. Айыҡ тормош етеш, лайыҡлы тормош тигәндә лә аңлата. Элек колхоз-совхоздар гөрләп эшләгән, ауыл халҡы эш хаҡы алған саҡта ауылдарҙа көмөшкә ҡыуыусылар бөтөнләй булманы. Һәр хәлдә, мин быныӊ шаһиты булманым. Хәҙерге көмөшкәселәрҙең күбеһенең был шөғөлә берҙән-бер йәшәү сығанағы. Беҙ уларға ҡаршы көрәшһәк, эскелеккә ҡаршы көрәшәбеҙ булып сыға. Ә айыҡ (етеш, лайыҡлы) тормош өсөн көрәшәйек, тиһәк, иң тәүҙә ауыл халҡын башҡа йәшәү сығанағы, эш менән тәьмин итергә (дәүләт механизмы шуның өсөн) тейешбеҙ. Беҙ иһә, Дон Кихот һымаҡ, һаман да ел тирмәндәре менән алышабыҙ. Сөнки хәйерселек бар ерҙә иман булмай. Аҫ кеше әхлаҡ хаҡында түгел, икмәк хаҡында уйлай. Ә икмәктең ниндәй юл менән табылыуы уның өсөн барыбер. Уны көмөшкә ҡойоуҙан тыйһаҡ, икмәк хаҡына ул бар юлға ла барасаҡ. Ул сағында инде көмөшкә ҡойоу "балалар уйыны" ғына булып тойоласаҡ...

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

МАТУР ХӘТИРӘ



# ТӘБИҒӘТ МЕНӘН СЕРҘӘШ ИНӘЙҘӘРЕМ

"Изгелек ерҙә ятып серемәй ул", ти халыҡ мәҡәле. Әҙәм балаһы күптән инде баҡыйлыҡҡа күскән булһа ла, ҡылған изгелектәре, яҡты нур булып, һәр ваҡыт кешеләрҙең йөрәген йылытып, тик яҡшы ғәмәлдәргә генә әйҙәп торор.

Байназар ауылында йәшәгән Ғәлина Гөлйөҙөм инәй тураһында ла ауылдаштары матур, йылы иҫтәлектәр һаҡлай. **Ишбулатова Шәмсениса апай хәтирәләренән:** "Пар ат егеп, бер арбаға тейәлеп, Ғәлиәкбәрҙән Бөрйәнгә барырға сыҡтыҡ. Оҙон юл бит, аттарыбыҙ асығыр, ашатып алайыҡ, тип, Ярыуға туҡтаныҡ. Борон унда йәйләү булған, кешеләр йәшәгән, һуңынан был ерҙәрҙә мал көттөләр. Иртәнсәк тороуға, ҡулымды күтәрә алмайым, килеп тороп һыҙлай, саҡ-ҡа Бөрйәнгә барып еттек. Шунан йәйәүләп Байназарға барҙым. Ҡулдың һыҙлауына түҙеп кенә торорлоҡ түгел. Әсәйем "Гөлйөҙөм инәйеңә бармайынса булмаҫ", тине.

Барғайным, инәй мине әйҙүкләп ҡаршы алды: "Уй, балаҡайым, иҫке нигеҙгә ятып йоҡлағанһың бит, ауырыу һуғылған", - тине. Мине өшкөрөп, тәрбиәләп, шәбәйтеп ҡайтарҙы. Гөлйөҙөм инәй, кешеләрҙе үтә күреп, тик дөрөҫөн генә һөйләп ултырыр ине.

**Маликова Хөмәйрә апай иҫтәлектәренән:** "Беҙ бала саҡтан эштең ауыр сағы күп булды инде ул. Әсәм менән ултырып һөйләшергә лә ваҡыт булманы. Һеҙҙең ауылға яҡын ғына Ҡадисала сепаратсы булып эшләргә тура килде. Иртә таңдан һауынсылар менән бергә тороп сығып китәм. Һәр һыйырҙың күпме һөт биргәнен яҙып алып, сепаратҡа һалам. Бер көн сепаратҡа һөт һалып торғанда кинәт йығылғанмын. Шул көйө тора алманым, аяҡ ныҡ шешенде, бер нәмә лә эшләй алмайым, ярау аҫта. Хәйбә апай Ғәлиәкбәргә, Һәҙиә апайымдарға алып барып ташланы. Апаруҡ ваҡыт үткәс, шеш һытылды, ҡаны ла, һыуы ла бергә аҡты. Йәбешеп йөрөй башлағас, Хәйбә апай килеп алды. Гөлйөҙөм инәйгә барғайным: "Таң менән ауырыуҙың үтеп йөрөгән юлына баҫҡанһың бит, күскенселәр һуғылған",- тине. Гөлйөҙөм инәй, минең нисек йығылғанды күреп белмәгән көйө, эргәмдә йөрөгән кеше кеүек һөйләп торһон әле, иҫ китмәле бит .

**Йосопова Нурия апай иҫтәлектәренән:** "Беҙҙең ауылда Ғәлина Гөлйөҙөм тигән өләсәй йәшәне. Шул өләсәйҙең кешеләрҙе дауалау һәләтенә әле булһа ла хайран ҡалам. Гөлйөҙөм өләсәйҙе үгәй әсәйем намаҙ, һабаҡтар өйрәнеп, үҙебеҙҙә унар-ун бишәр көнгә һалып ҡуя торғайны. Беҙ, өләсәй, тип, уға буйһонор инек. Әсәйемдең дә аяҡ-ҡулын төҙәтте ул өләсәй. Шәп белемсе ине.

Йәш саҡта ҡыуыш ҡороп, ҡуна ятып бесән эшләй торғайныҡ. Кисенә яҡындағы берәй ауылға уйынға барабыҙ. Йығылып ятҡан ҡайынға ут яғып, сәй ҡайнатырға баҡырсаларыбыҙҙы теҙеп элеп ҡуйғанбыҙ. Баҡырсамды алып, ҡыуышҡа ултыртайым тигәнсе, көлдө борҡотҡансы баҫтым. Шул арала ғына тәнемә ҡып-ҡыҙыл булып әллә нимәләр ҡалҡты ла сыҡты. Янып ҡына барам инде, уйын ҡайғыһы китте. Гөлйөҙөм өләсәйгә барғайным: "Уй, балаҡайым, һин ҡарт ҡайындың көлөнә баҫҡанһың бит, осоҡ сыҡҡан тәнеңә, - тип миңә тиҙ генә тоҙ, аттың ҡойроғон үреп ишкән бер ҡыл сылбыр бар ине, шуны өшкөрөп бирҙе. Иҫ китә лә ҡуя - Гөлйөҙөм өләсәй, ауылда ултырып, минең ҡарт ҡайындың көлөнә баҫҡанды ҡайҙан белгән тиһең...

Элек врачтар булманы, боронғоларҙың ауырыуҙарҙы тәрбиәләү ысулдарын иҫкә төшөрөп, йәштәргә һөйләһәң, ышанмаҫтар ине.

Ғаиләбеҙҙә биш бала үҫтек. Маһира тигән апайым бала саҡта һары менән ауырыған. Уны был ауырыуҙан дауалап шәбәйтеү тураһында шәхсән әсәйемдең ауыҙынан ишеттем. Тере балыҡты үтәнән-үтә күренеп торған быяла һауыттағы һыуға һалып, апайымдың эргәһенә ултыртып ҡаратҡандар. Балыҡ, һарғайып китеп, эсен әйләндереп, ятып үлгәс, апайым да шәбәйгән .

Әсәйем 1946 йылда, атайым 1956 йылда үлде. Беҙ үгәй инәй ҡулында ун ике йыл тәрбиәләндек. Үгәй инәйебеҙ бик һәйбәт булды, беҙҙе, биш баланы, бер ваҡытта ла ҡыйырһытманы. Һуңынан Ҡуяндан Юныс тигән атаҡлы муллаға барып, ун ике йыл бергә йәшәне. Юныс апам да (бабайым) иҫ киткес шәп кеше ине. Үгәй инәйемдең һеңлеһе Зөләйха апай Ҡуянға апамдың хәлен белергә барғанын һөйләгәйне. "Уй, Аллам, кис булып китте, ҡайтырға ҡурҡам бит әле, Байназарға тиклем берәйһе менән барһам инде", - тигән. "Ҡурҡма, ҡурҡма, хәҙер мин һиңә иптәш ебәрәм", - тигән Юныс апам. "Паромға тиклем бер аҡ кейемле кеше юлдың эргәһенән оҙатып килде лә шул ерҙә юҡ булды", - тип, ғәжәп итеп һәйләгәйне Зөләйха апай.

Һатыбалов Рауил, Әйүп ағайҙың улы, беҙҙең һеңлеләрҙең берәһен кәләш итеп алырға әйттерергә барған. Шакир ағайымдар риза булмай, быларҙы өйҙәренә индермәй ҙә ҡуялар, ти. Ике барып килгәндәр былар. "Юныс апа, әйҙә беҙҙең менән кәләш әйттерергә барып ҡара әле", - тип килгәндәр. Апам менән барғандар икән, ҡыҙҙың ата-әсәләре, ҡапҡаны асып, "Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ", тип ҡаршы алып торалар, ти. Бына шулай итеп кәләш әйттереп алып ҡайтҡандар. Матур ғүмер иттеләр. Апамдың шундай һәләттәргә эйә булыуына иҫ китә лә ҡуя.

Хужамдың (иремдең) әсәһе, ҡәйнәм менән, утыҙ һигеҙ йыл бергә йәшәнек, дүрт бала әсәһе булып ҡалдым. Хужамдың әсәһе Бикһолтан, Мырҙабаевтар араһынан, атаһы Ғайса. Ике тапҡыр мәрткә барған. Ҡайным коммунист булған. Үҙе түрә булғас, ҡатыны барғыһы килмәһә лә, көсләп йыйылыштарға ебәргән. Ҡәйнәм клубҡа барһа, шәм һүнә лә ҡуя икән. Улы Кәрим, минең хужам: "Бер быҙауыбыҙҙы йылан саҡты, әсәйем йыланды арбағайны, ишек алдына инеп, беҙҙең күҙебеҙ алдында тәгәрләп ятып үлде", - тип һөйләне.

Ҡотан ауылында йәшәүсе Нәҙершин Миңнурҙың да өләсәһе тураһындағы хәтирәләре бик фәһемле: "Мин үҙем ике өләсәй араһында үҫтем. Хатта армияға китер алдынан Аҫылбикә өләсәйемдең баш осонда йоҡланым. Икенсе өләсәйем, әсәйемдең әсәһе Сәрүәржиһан Сабитова Аҡбута ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. Өләсәй 1965, 1966 йылдар тирәһендә етмеш һигеҙ йәшендә үлде. Эргә-тирәләге бөтөн ауыл кешеләре уға килерҙәр ине. Йыландарҙы арбап тотоп килтереү уға бер ни ҙә торманы. Быуын ултыртыр, ҡот ҡойор, кешеләрҙе өшкөрөп дауалар ине.

Бер саҡ әсәйем йыланғараҡ йәки күҙ сағылйыу ауырыуы менән сирләп киткән. Ундай саҡта кеше ҡояшҡа, яҡтыға ҡарай алмай. Сәрүәржиһан өләсәйем ҡара йыланды арбап, алъяпҡысының итәгенә һалып алып килә лә көршәктәге ҡайнап торған һыуға һала. Әсәйемде ян-яҡтан урап, көпләп ултырта ла: "Ҡыҙым, тик көршәккә генә текләп ҡарап ултыр",- ти. Әсәйем көпләнеп ултырған көйө күрә башлай.

Әлимғолова Асия апай ҙа, рәхмәттәр әйтеп, өләсәйемде гел иҫенә төшөрә торғайны. Ул бала таба алмай, бик ҡаты ауырыған. Сәрүәржиһан өләсәй килеп кергән дә сәстәрен туҙҙырып ебәреп өшкөргән. Шунан ике ҡатындан Асия апайҙы ҡултыҡ аҫтынан тотоп, тубыҡландырырға ҡушҡан. Үҙе тубығы менән ҡатындың умыртҡаһын һыҙырып төшөргән. Бала тыуымға килгән.

Борон ата-бабаларыбыҙ баланы тыуғандан алып даими рәүештә тәбиғәттең серенә төшөндөрөргә тырышҡан, киҫкен хәл-ваҡиғаларҙа үҙен һаҡлап алып ҡалырға өйрәткән. Бала ғаиләһендә үк тормош мәктәбен үткән. Ауыр ваҡытта кешегә беренсе ярҙам күрһәтә белеү хәҙерге заманда, аҡса, байлыҡ кеше ғүмеренән өҫтөн булғанда, медицина ярҙамы түләүлегә әйләнеп барғанда, ауылдарҙа медпункттар ябылған осорҙа, дарыуханаларыбыҙ ялған дарыуҙар менән тулғанда, бигерәк тә ярап төшөр ине лә бит. "Фәнни коммунизм", "Атеизм"ды өйрәнеп ултырған беҙҙең быуын вәкилдәре ҡайҙан белһен инде уларҙы. Әллә ниндәй заманда йәшәйбеҙ. Халҡы тураһында хәстәрлек күрергә тейеш ҙур-ҙур түрәләр, миллионлап урлашып, төрмәләргә ултыралар. Көн һайын телевизорҙан, интернеттан ярҙамға мохтаж балаларҙы күрһәтәләр. Улар йылдан-йыл күбәйгәндән-күбәйә баралар. Сит илгә барып дауаланыр өсөн ҙур суммала аҡса кәрәклеге тураһында хәбәр итәләр. Милләттең һаулығы тураһында әллә ни хәтле һүҙҙәр алып барыла, ул балаларҙы бушлай дауалап булмаймы үҙебеҙҙең илдә? Бәләкәй генә эш хаҡына, осон-осҡа ялғап, көс-хәлгә йәшәп ятҡан ата-әсәләр ҡайһылай итеп кенә анау хәтлем ер аяғы-ер башы сит илгә балаларын алып китеп ултырһын инде. Ниңә үҙебеҙҙең илдә шундай дауаханалар юҡ икән?..

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы.**

**(Аҙағы. Башы 44-се һанда).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Үҙ-үҙеңә абсолют ышаныуҙың төп серҙәре

### Беренсе сер

**Беренсе өҫтөнлөк.**

4. Интуицияға ышанығыҙ.
5. Хаталарҙы танырға һәм уларҙы төҙәтергә өйрәнегеҙ; уларҙың ҡиммәтле һабаҡ биреүен аңлағыҙ.
6. Үҙегеҙҙе һәм башҡаларҙы яратығыҙ.
7. Тыңларға өйрәнегеҙ, алдан "был яҡшы", "был насар" тигән фекерҙәр белдермәйенсә, хатта һөйләгәндәргә ышанмаһағыҙ ҙа, тыңлағыҙ.
8. Үҙегеҙ яҡлаған нәмәгә иғтибарлы булығыҙ.
9. Яңы аңығыҙ һеҙҙе яҡшы яҡҡа үҙгәреү өсөн дәрт һәм илһам менән тәьмин итәсәген аңлағыҙ.

Үҙегеҙҙән: "Инаныуҙарым нигеҙлеме?", "Бәлки, мин яңылышамдыр?" - тип һорағыҙ. Әгәр икенсе кешегә ҡарата шундай һорауҙар бирһәгеҙ, объектив баһа сығарырға, был осраҡта, һис шикһеҙ, ни өсөн уларҙың яңылышыуын ышандырырлыҡ итеп раҫларға тейешһегеҙ. Үҙегеҙҙең инаныуҙарығыҙҙы тап шул күҙлектән сығып ҡарағыҙ. Һәр мәғлүмәтте шик аҫтына ҡуйығыҙ һәм барлыҡ мөмкинлектәрҙе ҡарап, анализлағандан һуң ғына һығымталар яһағыҙ.

*Ыңғай яуап бары тик кеше үҙ-үҙен анализлағанда һәм үҙ-үҙен аңлауҙан ҡурҡмағанда ғына килә. Әгәр ул ныҡлы ҡарар итһә, үҙе тураһында ниндәйҙер мөһим хәҡиҡәтте генә асыҡлап ҡалмаҫ, ә психологик өҫтөнлөккә эйә булыр. Ул үҙ ҡулдары менән үҙенең кешелек дәрәжәһе тураһында декларацияға ҡул ҡуйып, уҙаңы формалашыуға беренсе аҙымын яһар. Карл Юнг.*

## Ни өсөн һеҙ үҙгәрә алаһығыҙ

Барлыҡ үҙгәрештәрҙең иҫәп нөктәһе булып аңды сикләүсе өҫтөнлөклө инаныуҙарҙы алмаштырыу тора. Үҙ донъябыҙҙы үҙебеҙ төҙөгәнлектән был мөмкин дә инде.

Үҙгәрештәр төпкө аң һәм күҙаллауҙар менән билдәләнә. Профессор Джеймс әйтеүенсә, улар фекерләүҙең эске аспекттары үҙгәреүҙән башлана. Беҙгә тышҡы үҙгәрештәрҙең эске үҙгәрештәр эҙемтәһе булыуы яҡшы таныш.

Өҫтөнлөклө уй-фекерҙәрҙе һәм инаныуҙарҙы үҙгәртеп, эске аңға, һәм һөҙөмтә булараҡ, тышҡы хәл-торошҡа йоғонто яһайбыҙ.

Бала саҡтан таныш Алиса тураһындағы әкиәттә көҙгө артында уның бер проблемаһы тыуа. Яңы донъяһын аңлағанға тиклем уға иҫке таныш әйберҙәр тураһында яңы хәҡиҡәтте ҡабул итергә тура килә. Ул яңы тормошҡа яраҡлашырға мәжбүр була. Уйын кәрттәре менән осрашҡас, Алиса уларҙың ике яғы булыуына иғтибар итә. Әгәр кемделер белергә теләһә, уның ике яғына ла ҡарарға, икенсе төрлө әйткәндә, тулы картинаны күҙалларға тейеш була. Был беҙҙең тормошобоҙға ла ҡағыла.

Тормошто дөрөҫ юлға һалып ебәрер өсөн һөҙөмтә бирмәгән бөтөн нәмәне тикшереп, ни өсөн шулай икәнлеген асыҡларға кәрәк. Был беҙгә әле торған урыныбыҙҙан кем булырға телгәнебеҙ араһында күпер һалырға ярҙам итәсәк.

*Кешенең эске ҡоллоғоноң беренсе сәбәбе - наҙанлыҡ, үҙ-үҙеңә ҡарата наҙанлыҡ. Үҙеңде аңламай, үҙеңдең психологик механизмдарыңдың нисек эшләү принциптарын аңламай тороп, кеше азат була алмай, үҙе менән идара итә алмай һәм ҡеүәтле көстәр ҡулында мәңгелеккә уйынсыҡ, ҡол булып ҡаласаҡ. Бына ни өсөн барлыҡ боронғо ғилемдә азат булыу өсөн тәү сиратта "үҙ-үҙеңде аңла" тигәндәр. Гурджиев.*

Әлегә тиклем төп проблема булып үҙегеҙҙең кем һәм кем булырға тейешлегегеҙҙе белмәү тора ине. Үҙегеҙ хаҡындағы ялған күҙаллау сикһеҙ ҡеүәтте иреккә сығарыуға ҡамасаулай. Һеҙ ситлектәге ҡош кеүек, ситлек тышында ниндәй киңлек барлығы тураһында хатта белмәйһегеҙ ҙә. Хаталы дәлилдәр үҙегеҙҙең ни тиклем үҙенсәлекле, баһаһыҙ һәм һәләтле булыуығыҙҙы аңларға ҡамасаулай.

**Роберт ЭНТОНИ.**

✓ *Тейешенсә йәшәү өсөн йә аҡыллы, йә сынйырлы булыу кәрәк.*

*(Диоген).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# МАТБУҒАТ ХЕҘМӘТСЕЛӘРЕ




Вәсилә ӘБДРӘХИМОВА төҙөнө.

**44-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Ашына. **Ураҡсин.** Күрмәксе. Әсәйем. Ҡойма. Ерек. Тартюф. Краб. Лабрадор. Милл. Аҡыҡ. Терпуг. Аэвит. Ағуна. Авар. Таня. Аушев. Етер. Ыҙан.

**Вертикаль буйынса:** Ҡатлама. **Кейекбаев.** Аҡсалата. Урам. Вәлиев. Әрем. Шкалик. Ҡарта. Уғры. Еткер. Уңыш. Азия. Емца. **Сәйетбатталов. Марат.** Йорт. Морфология.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Ноябрь (Мөхәррәм - Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (27) дүшәмбе | 7:05 | 8:35 | 13:30 | 15:52 | 17:22 | 18:52 |
| 10 (28) шишәмбе | 7:07 | 8:37 | 13:30 | 15:51 | 17:21 | 18:51 |
| 11 (29) шаршамбы | 7:09 | 8:39 | 13:30 | 15:49 | 17:19 | 18:49 |
| 12 (30) кесе йома | 7:11 | 8:41 | 13:30 | 15:47 | 17:17 | 18:47 |
| 13 (1) йома | 7:13 | 8:43 | 13:30 | 15:45 | 17:15 | 18:45 |
| 14 (2) шәмбе | 7:15 | 8:45 | 13:30 | 15:44 | 17:14 | 18:44 |
| 15 (3) йәкшәмбе | 7:17 | 8:47 | 13:30 | 15:42 | 17:12 | 18:42 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БЫЛ ҠЫҘЫҠЛЫ*

## МӨХӘММӘТ ИСЕМЛЕЛӘР

Донъя мосолмандары араһында балаларына Мөхәммәт исемен ҡушыусылар бихисап. Ғәрәптәрҙә лә беренсе балаларына Мөхәммәт исемен ҡушыу ғәҙәткә кергән. The Guardian гәзите хәбәр итеүенсә, 2014 йылда Британияла Мөхәммәт исеме беренсе урынды алған. Бер йыл эсендә 27-се урындан беренсе урынға күтәрелгән. Хатта Оливер, Джек, Гарри, Джеймс, Чарли кеүек ғәҙәти инглиз исемдәре лә әле Британияла бик үк киң таралмаған. Был күрһәткес мосолмандарҙың Рәсәйҙә генә түгел, Европала ла артыуы тураһында һөйләй.

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

## ТӨРКИ ДОНЪЯҺЫНДА

**Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы ҡурайсыһы, халыҡ-ара конкурстар лауреаты Илнур Хәйруллин төрлө традицион музыка ҡоралдарында уйнаған төрки музыканттарының сәйәхәтендә ҡатнашты.**

Көньяҡ Корея менән Төркиә ҡалалары буйлап гастролдәрҙе "ТӨРКСОЙ" төрки мәҙәниәте халыҡ-ара ойошмаһы үткәрҙе. Ҡатнашыусылар араһында Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Әзербайжан һәм Рәсәй төбәктәре - Башҡортостан, Якутия, Тыва, Хакасиянан артистар булды. Көньяҡ Кореяның Даегу ҡалаһында "Эпиканан көйгә тиклем: төрки традицион музыкаль мәҙәниәте" тип аталған халыҡ-ара конференция ойошторолдо. Форумға Бөйөк ебәк юлын өйрәнеүсе Европаның, Азияның билдәле ғалимдары йыйылды. Сәнәғәт проблемалары һәм ғилми эшмәкәрлек булдырыу тураһында ғына түгел, мәҙәни бәйләнештәр мәсьәләләре буйынса ҡорҙар үтте. Төркиәнең Чешме һәм Измир ҡалаларында "Ҡорҡот ата һәм төрки донъяһы" халыҡ-ара конгресы ла ҡыҙыҡлы фекерҙәргә бай булды. Илнур Хәйруллин ҡурайҙа боронғо көйҙәр - "Урал", "Сыңрау торна", "Аҡ яурын - сал бөркөт" көйҙәрен, халыҡ марштарын башҡарҙы, ҡумыҙҙа уйнап, өҙләп күрһәтте. "Бындай осрашыуҙар музыканттарҙың донъяға ҡарашын байыта, халыҡтар араһында мәҙәни йолалар менән алышыу мөмкинлеге бирә, берҙәм төрки донъяһында халыҡ-ара бәйләнештәрҙе нығыта", - ти Илнур Хәйруллин.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**7 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия

**8 ноябрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), музыкаль комедия

**10 ноябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури)

**11 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**12 ноябрь "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Ғәйетбай), комедия

**13 ноябрь "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры

### Милли йәштәр театры

**8 ноябрь "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00

**11 ноябрь "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтер йомғаҡтары һүткәндә

**12 ноябрь "Тоҡ эсендәге бесәй, или Башкирская пленница"** (М. Кәрим), спектакль-концерт

### Х. Әхмәтов ис. Башҡорт дәүләт филармонияһы

**12 ноябрь "Яратам..."** Башҡортостандың халыҡ артисы Әлфиә Юлсуринаның бенефисы

**14 ноябрь "Марсель Ҡотоев vs Marcello Cutugno"** Марсель Ҡотоевтың концерты

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**7 ноябрь "Һатам! Иремде һатам!"** (Н. Ғәйетбай), комедия

**8 ноябрь "Рәсәйҙең берҙәмлеге - халыҡтар дуҫлығында"** Бейеү театры концерты. Башлана 12.00

✓ *Ҡыҙ ҡыҙлы булмаҫ, әсә ҡәҙерен белмәһә; ул уллы булмаҫ, атай ҡәҙерен белмәһә.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*БАЛАЛАР ҠОРО*

# МӘКТӘПТӘ "БИШЛЕ" АЛЫР ӨСӨН...

## өйҙә башҡортса һөйләшергә кәрәк

**Балалар баҡсалары буйлап сәйәхәтте дауам итәбеҙ. Был юлы Өфө районы Шамонин ауылының "Аҡбуҙат" башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре Әминә Әмирова, Гүзәл Үтәбаева һәм Ильяс Хөсәйенов менән ябай ғына, әммә мөһим һәм етди темалар буйынса әңгәмәләштек.**



**"Аҡбуҙат"та күңеллеме һеҙгә?**

**Гүзәл:** Мин бығатиклем Жуковолағы "Карлуғас" балалар баҡсаһына йөрөгәйнем, ҡустым Азамат менән хәҙер бында күстек. "Аҡбуҙат"та минә бик оҡшай, ҡурсаҡ уйнайбыҙ. Матур итеп һүрәт төшөрөргә яратам.

**Ильяс:** Ә мин әсәйем бында тәрбиәсе булып эшләй башлағас килдем. Ул хәҙер мине бик һуң ғына килеп ала, шуға мин балалар баҡсаһына йөрөргә яратмайым. Өйҙә яңғыҙым ултырғым килә.

**Әминә:** Мин өйҙә яңғыҙым ғына ултырғаным бар ул. Өс көн буйы ауырығайным, өс көн буйы өйҙә үҙем генә ҡалып торҙом. Әсәйем ашарға бешереп, эшкә китте. Күп итеп мультиктар ҡарарға рөхсәт итте. Хәлемдә белергә күршеләр инеп торҙо, әсәйем йыш ҡына өй телефонына шылтыратты.

**Ниндәй әкиәттәр ратаһығыҙ?**

**Ильяс:** Мин яңы "Колобок"ты һәм "Сәңгелдәк"те яратам.

**Әминә:** "Красная шапочка", "Колобок" әкиәттәре оҡшай. Мин шиғырҙар һөйләргә яратам. Әсәйем теге юлы "Ер шарының картаһына Ҡараһаң әкшы ғына, Башҡортостан шул картала Бер япраҡ саҡлы ғына", - тигән шиғырымды видеоға төшөрҙө. Садикта ла башҡортса шиғырҙар ятлаталар.

**Гүзәл:** Минең Флүзә өләсәйем башҡорт әкиәттәрен күп һөйләй. Ә телевизорҙан "Кызыл эшләпә", "Гуси и лебеди" әкиәттәрен яратып ҡарайым. Ҡалғандарын тиҙ генә иҫләмәйем шул, әйтер инем.

**Ильяс:** Мин башҡорт батырҙары тураһында әкиәттәр беләм.

**Ә батыр кем була ул?**

**Ильяс:** Ул көслө кеше.

**Әминә:** Батыр - Шайморатов генерал була. Ул һәйкәл, беҙҙә атҡа менеп һаҡлап тора. Бөтәһен дә күрә һәм белә. Шайморатов генерал ҡалала, ҙур квадратта. Ул һыуҙа батмай һәм утта ла янмай.

**Ильяс:** Ул яҡшы йөҙә белгән өсөн һыуҙа батмай, тиҙ йүгерә алған өсөн утта янмай, уәт!

**Әминә:** Ильяс, Шайморатов генерал бит - һәйкәл! Алдан ысын кеше булған инде ул, тик ун миллион йыл йәшәгән дә, үлгән. Беҙҙең күрше Рәсүл фотоһын күрһәтәм тине лә, онотто.

**Гүзәл:** Шайморатов генерал Бөйөк Ватан һуғышы булғанда үлгән. Ул бернисә һалдатты ҡотҡарыр өсөн йәнен биргән. Һәйкәл Салауат Юлаевҡа ҡуйылған бит, Әминә.

**Салауат Юлаев кем һуң?**

**Ильяс:** Ул илде ҡотҡарған кеше.

**Гүзәл:** Салауат Юлаев - беҙҙең батырыбыҙ, ул донъяны ҡотҡарған.

**Әминә:** Апай, һеҙ нимә, бөтөнләй бер нәмә лә белмәйһегеҙме? Мәктәпкә физикаға йөрөмәнегеҙме? Унда бөтәһенә лә өйрәтәләр, өлкәндәр бөтәһен дә белһен һәм бәләкәстәргә өйрәтһен өсөн.

**Юҡ, физикаға йөрөмәнем шул. Ҡайҙа өйрәтәләр ул физиканы?**

**Әминә:** Мәктәптә инде. Ысын мәктәптә, әҙерлек төркөмөндә түгел. Мин әле Башҡортостандың флагын беләм. Өстә йәшел төҫ, уртала аҡ, аҫта күк төҫ. Аҡ төҫ уртаһына һары ромашка төшөрөлгән.

**Гүзәл:** Ул ромашка түгел, ә ҡурай. Ҡурай - ул үлән, беҙ апайым һәм өләсәйем менән бер концертҡа барғанда, шул турала легенда һөйләнеләр, уйнап күрһәттеләр. Мәктәпкә барғым килә ул, аҡыллы булыр өсөн уҡырға кәрәк бит. Үҫкәс, мин врач булам, балалар сирләһә, укол ҡаҙайым. Мин сирләгәндә минә укол эшләнеләр, ҡурҡыныс түгел бер ҙә.

**Ильяс:** Ныҡ иртә торорға кәрәк булһа ла мәктәпкә барғым бик килә. Мин көн дә шул тиклем иртә торам. Ә үҫкәс, полицияла эшләйем.

**Әминә:** Үҫкәс, теш табибы булам да, тештәрҙе дауалайым. Үҙемдән бәләкәстәргә табиптарҙың эше тураһында һөйләрмен. Ә мәктәпкә барғас, тик "бишле" алыр өсөн башҡорт телендә һөйләшергә кәрәк.

**Ильяс:** Мин башҡорт мәктәбенә барам бит, шуға башҡорт телен беләм. Әле әсәйемдән тигеҙ итеп ҡағыҙ ҡырҡырға, атайымдан утын ярырға өйрәнәм.

**Балалар баҡсаһында дуҫтарығыҙ күптәр?**

**Ильяс:** Ике яҡын дуҫым бар. Ҡыҙҙар менән уйнамайым.

**Гүзәл:** Хаят менән уйнайһың бит!

**Әминә:** Хаят Ильясты ярата. Ә мин Искәндәрҙе яратам.

**Гүзәл:** Мин былай береһен дә яратмайым. Сөнки минә ниндәй малай кәрәк икәнен белмәйем әле.

**Ильяс:** Мин әсәйемде яратам, ҡыҙҙарҙы яратмайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балалы өйҙә сер тормаҫы билдәле, һорамаған һорауҙарына ла яуаптар алып ҡыуандым. Ошо ҡыҫҡа ғына әңгәмә барышында балаларҙың туған теленә, иленә булған мөнәсәбәте, ата-әсәһенең тәрбиәһе һәм, әлбиттә, Шамонин ауылы "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһының эше сағылды ла ҡуйҙы. Зирәк аҡыллы кескәйҙәр ололар ауыҙынан ысҡынған һәр мәғлүмәтте отоп алырға ғына тора, хәтер ҡумтаһына һалып та ҡуя икән. Ни бары мәктәптә "физика уҡып", башҡорт халҡының әкиәттәрен, тарихын, милли геройҙарын, туған телен һәм мәҙәниәтен өйрәтеүсе ололар булыуы ғына шарт.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# ЙӘШТӘР ТАУЫШЫ

**19 ноябрҙә баш ҡаланың "Башҡортостан" концерт залында VI "Йәштәр тауышы" йәш яҙыусылар фестивале үтә. Ул Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда иғлан ителгән Әҙәбиәт йылына бағышлана.**

Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығының төп белгес-эксперты Неля Ғәйнетдинова белдереүенсә, йыл һайын дәүләт заказы буйынса "Йәш тауыштар" серияһында әҙәбиәт өлкәһенә тәүге аҙымдарын яһаусы йәш яҙыусыларҙың әҫәрҙәре баҫыла. Быйыл "Китап" нәшриәтендә был серия аҫтында өс телдә биш йәш яҙыусының - Розалия Зарипованың "Ерем моңо", Минлегөл Тайсинаның "Бала саҡ күҙҙәре", Хәким Алсынбаевтың "Күңел дәфтәре", Михаил Кривошеевтың "Уфимский полуостров", Илүсә Исмәғилеваның "Йыһандың бер тамсыһы" китап булып сыҡты.

Фестивалдә йәш яҙыусылар һәм шағирҙар менән осрашыуҙар, китап презентациялары була. "Китап" нәшриәте яңы китаптарҙы һатыуҙы ла ойоштороасаҡ.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДОНЪЯЛА НИ ӘСЕ?

## Етемлек әсеһе әсе

Ҡыҙ ҡыҙлы булмаҫ, әсә ҡәҙерен белмәһә; ул уллы булмаҫ, атай ҡәҙерен белмәһә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ир өсөн ҡайһы саҡта ҡатынының теле дошманыныҡынан да хәтәрерәк була.

**(Себастьян Брант).**

Турғай ҡанаты менән бөркөт һымаҡ оса алмаҫһың...

**(В. Генри Хадсон).**

Тормош байлығы беҙ оноҡҡан хәтирәләрҙә.

**(Чезаре Павезе).**

Тейешенсә йәшәү өсөн йә аҡыллы, йә сынйырлы булыу кәрәк.

**(Диоген).**

Күрәҙәлектәр тарихҡа ҡусҡәс кенә өйрәнелә башлай.

**(Томас Браун).**

Үҙ-үҙеңде яратыу енел йәшәүҙе аңлатмай әле.

**(Марлен Дитрих).**

Күңелең бошонғанда башҡалар бәхетенә ҡарау ҡыйын шул...

**(Альфонс Доде).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ир ҡатынына бик ҡаты үпкәләгән. Ир үҙе дини кеше, ә ҡатыны бер нәмәгә лә ышанмай, ти. Ир көн дә ҡатынын дингә ылыҡтырыу өсөн нимәләр эшләй, әммә тегеһе уның өгөтләүҙәренә ҡунмай, ти. Аптырағас, ир мулланы өйөнә саҡыра һәм ҡатынын дингә килергә өгөтләүҙе үтенә. Быны иртән иртүк былярҙың йортона мулла килеп инә. Был саҡта өй хужаһы намаҙ ҡылып ултырған була. Мулла изән һепереп йөрөгән ҡатынға мөрәжәғәт итеп, былай ти:**

**- Ирең һине дингә килеүҙән баш тарта, бер вәҡитта ла Аллаға арнап доғалар уҡымай, ирең менән бергә намаҙ уҡырға теләмәйһең, тип зарланды. Ана, ҡара иреңә, иртәнге намаҙ тамамланһа ла, ул һаман доғалар уҡып ултыра...**

**- Ниндәй доға уҡып ултырһын ул, - тип ҡул ғына һелтәй ҡатыны. Быны ишетеп ултырған ир, ярһыуынан доғаларын ҡыҫҡырып ҡабатлай башлай.**

**- Ана, ишетәһенме, - тип өндәшә тағы мулла,- ул бит доғаларынан айырыла алмай, мәсеткә даими йөрөй...**

**- Һин дә ышанғанһың икән иремә, - ти ҡатыны. - Ул бит әлеге мәлдә уйҙары менән Алла эргәһендә түгел, ә кибеттә, һатыусы менән тауарҙың хаҡын нисек төшөрөү тураһында бәхәсләшә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 6 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 5065